✔ *"Олоғая барған һайын мин был хәҡиҡәттең инандырырлыҡ дәлилдәрен күрҙем. Аллаһы Тәғәлә ысынлап та кешеләрҙең ғәмәлдәре менән идара итә, әгәр уның теләгенән башҡа хатта турғай ҙа ергә төшмәй икән, уның ҡатнашлығынан тыш тотош империяның сәскә атыуы мөмкинме?".*

*Бен Франклин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 ИЮНЬ - 1 ИЮЛЬ (ҺӨТАЙ - МАЙАЙ)
2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№26 (444)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Кредит алырҙан алда...**

түләренде лә уйла



5

**Башҡорт йәйләүҙәре**

Беҙ улар хаҡында нимә беләбеҙ?



7

**Һауаға ҡарап төкөрмә...**

төкөрөгөн төшөр битеңә



8-9

**Камиллыҡҡа табан...**

нисә көн барырға?



11

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Халыҡ мөрәжәғәттәренә яуапһыҙ ҡараған етәкселәргә, чиновниктарға ҡаршы нисек көрәшергә?

***Хәкимйән МЫРҘАҒОЛОВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Заманында миңә төрлө сәбәптәр арҡаһында бюрократтар менән күп алышырға тура килде. Коммунистар партияһы хакимлыҡ иткән йылдарҙа чиновниктар партияның ҡоро директиваларына арҡаланды, юғары рангылағы түрәләргә юлябыҡ булды, халыҡты ҡабул итмәй торғайнылар. Ахыр сиктә матбуғат баҫмалары редакцияларына барып, хат яҙып, улар аша ла һәр төрлө ведомство, урындағы власть органдарынан яуаптар алғыланым. Матбуғат органдарынан бер аҙ шөрләй төшһәләр ҙә күп осраҡта дөйөм һүҙ бутҡаһы - ҡоро һүҙ яҙылған ҡағыҙ биреү менән сикләнә ине чиновниктар. Ире һуғышта һәләк булған бер әбейҙең өй ҡыйығын яптырыу өсөн ҡайҙарға ғына мөрәжәғәт итмәнем! Ярҙам булманы. Ахырҙа, әбейҙең туғандары, күршеләре йыйылып, өмә ойоштороп, үҙебеҙҙең аҡса һәм материал менән үҙебеҙ ябып бирҙек өй ҡыйығын. Ә бит түбәһенән һыу тамып торған, йә ярым емерек өйҙә йәшәүсе ундай тол әбейҙәр ауылда берәү генә түгел ине, бөтәһенә лә әлегеләй ярҙам итергә беҙҙең хәл дә, аҡса ла, ваҡыт та юҡ ине шул...

Бөгөн ветерандарыбыҙ ҙа бик аҙ ҡалып килә, ләкин уларға иғтибар арта төштө. Шулай ҙа проблемалар бик күп тормошобоҙҙа. Яңыраҡ Баймаҡ районының Йылым ауылына йомош менән барып ҡайттым да... башҡаса унда ғүмеремдә лә аяҡ баҫмаҫҡа үҙемә һүҙ бирҙем. Сәбәп ниҙә, тиһегеҙме? Беҙҙең мәңгелек проблема - юлдар. Был ҡот осҡос соҡор ҙа саҡыр юл ишаратынан нисек йөрөйҙәр инде меҫкен халыҡ, унныһын Алла ғына белә. Етәкселәргә, депутаттарға күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итеп, халыҡ өмөтөн өҙгән, ҡул һелтәгән. "Район етәкселәре йылдар буйы бер килеп ураһасы", - ти улар. Фәҡәт ҡеүәтле йөк машиналарында Йылым, Ишбирҙе, Бөрйән-йылға ағасын ташыта ғына беләләр. Ике-өс ауыл халҡы берләшеп, ҡултамғалар йыйып, район хакимиәтенең яңы башлығына хат яҙып ҡарайбыҙ, унан күҙ күрер, тип оҙатып ҡалды мине яҡташтар. Әле ишетеүемсә, тап ошо турала яңы закон сыҡҡан, имеш. Халыҡ мөрәжәғәттәрен һанламаған, уға ваҡытында яуап бирмәгән өсөн урындағы власть органдары, етәкселәр өсөн административ яуапҡа тарттырыу саралары ҡарала икән унда. Яҡташтарыма ошо закон тексын табып, уның менән яҡшылап танышып, хат-ғаризаларын шул законға нигеҙләнеп яҙырға кәңәш бирәм.

***Ризван ХАЖИЕВ, яҙыусы, журналист:*** Ғүмер буйы матбуғатта эшләгән кеше булараҡ, яҡшы беләм: халыҡ берәй мәсьәлә буйынса урындағы власть органдарына хат-ғаризаларын юллай барып, арыған, һуңғы сиктә гәзиттәргә яҙып ебәрә ине. Мин "Совет Башҡортостаны" (хәҙерге "Башҡортостан") гәзитендә эшләгән йылдарҙа редакциябыҙға килгән хаттарҙың күбеһе йомош юллау ғаризалары булды. Көнүҙәк мәсьәлә күтәргән етди хаттар буйынса хәбәрселәр командировкаларға сығып, хәлде тикшерә, урындағы етәкселәрҙе тетеп мәҡәлә яҙып сыға һәм шунан һуң ғына саралар күрелә торғайны. Хәҙер журналистар хаттар буйынса командировкаларға сыҡмай, тип әйтерлек, сөнки, был уларға отошло тема бирһә лә, икенсе яҡтан, улар власть органдары вәкәләтен үҙ өҫтөнә алырға, уларҙың бурысын атҡарырға тейеш тә түгел.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# ОЙОП ЯТҠАН ҒӘМЕН УЯТЫР ҘА,

## Яурын яҙыр әле бар халҡым...

*Заман заңы һиндә, рухи асыл,*
*Ҡуҙғыған сәм, өмөт-ышаныс.*
*Күңелдәрҙе имләп, фекер емләп,*
*Килер көнгә ишек асаһың.*

*Һин - таяныс юҫыҡ буталғанда,*
*Тормош дәреслеге һәр яҙмаң.*

*Аҡһаҡалдай, аҡыл хазинаһын*
*Өләшәһең йомарт - күҙ һалһаң.*

*Бар һорауға яуап табам һиндә,*
*Тик изгелек нуры ағыла.*
*"Киске Өфө"! Һинең аҡ биттәрең*
*Һомай ҡанатылай ҡағына.*

*Һиндәге көс, зиһен ҡеүәтенән*
*Аң яҡтырып китә уй балҡып.*
*Ойоп ятҡан ғәмен уятыр ҙа,*
*Яурын яҙыр әле бар халҡым.*

*Һинең менән атлар киләсәккә,*
*Хыял осоштары саҡырғас.*
*Күңел күгендәге болоттарҙы*
*Һин ҡыйпылтып киҫкән ҡарлуғас.*

Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА.



Ейәнсура апайҙары ярата "Киске Өфөнө".
Филүс Шакиров фотоһы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СИТ ИЛДӘН ИНДЕРЕЛЬҺӘ...

**"Россельхознадзор"ҙа аныҡлауҙарынса, донъяның 19, шул иҫәптән 10 Евросоюз иленән ит индереүгә ваҡытлыса сикләү ҡуйылған. Идаралыҡ тарафынан бындай ҡарарҙың ҡабул ителеүе Евросоюз илдәрендә юғары патоген штаммлы эсәк ауырыуҙары таяҡсаһының (Escherichia coli, E. coli - высокопатогенный штамм кишечной палочки) киң таралыуы менән бәйле.**

"Россельхоз" тарафынан Рәсәйгә сит илдән индерелгән иттең хәүефһеҙлек күрһәткестәре, шул иҫәптән микробиологик хәүефһеҙлеге буйынса ентекле лаборатор тикшереүҙәр үткәрелә. Был мониторингтарҙың һөҙөмтәһе буйынса 2010 йылда беҙгә индерелгән 86 ит партияһында ошондай таяҡсалар табылған. Шуға күрә 38 илдән - 207, шул иҫәптән Евросоюздың 15 илендә 69 ойошма эшмәкәрлегенә контроль арттырылған", - тип хәбәр итә идаралыҡ. Улар фекеренсә, малды һуйғанда һәм түшкәһен эшкәрткәндә мал сеймалының микроблы бысраныу хәүефе ҙур булғанлыҡтан, был продукция ҙур хәүеф тыуҙырыусы булып тора.

Германия һәм Евросоюздың компетентлы ойошмалары әлегәсә аҙыҡ-түлек продукцияһының зарарлы таяҡса менән ағыуланыу сығанағын таба алмай. Был идаралыҡты айырыуса хәүефкә һала. 2011 йылдың беренсе ярты йыллығы мониторинг һөҙөмтәләре буйынса 21 илдән - 64, шул иҫәптән 5 Евросоюз иленән 19 ойошмаһы ҡаты күҙәтеү аҫтына алынған. "Россельхознадзор" артабан да был өлкәләге хәлдең үҫешен күҙәтәсәк, һәм, ихтимал, сит илдәрҙән индерелгән аҙыҡҡа өҫтәмә саралар ҙа ҡулланылыуы мөмкин.

# ТӨРМӘГӘ УЛТЫРҒЫҢ КИЛМӘҺӘ...

**Алкоголь эсемлектәр һатып алғанда һеҙҙән паспорт йәки водитель танытмаһы һорауҙары мөмкин.**

"Российская газета"ла спиртлы эсемлектәр һатыуға ҡағылышлы яңы ҡағиҙәләр баҫылып сыҡты. Уларға ярашлы, спиртлы эсемлек һатып алғанда хәҙер һатыусы бәлиғ булыуҙы иҫбатлаусы документ һорауы мөмкин. Төп шарт - документта тыуыу датаһы яҙылыуы һәм фото булыуы. Йәғни һеҙ һатыусыға Рәсәй йәки сит ил паспортын, шулай уҡ водитель танытмаһын күрһәтә алаһығыҙ.

Бөгөнгө көндә бәлиғ булмағандарға спиртлы эсемлек һатҡан сауҙа хеҙмәткәрҙәренә ярайһы уҡ мәрхәмәтле штраф санкциялары ҡаралған: физик шәхестәргә 2 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә - 40 мең һумға тиклем. Ләкин яҡын арала яҙаның ҡатыланыуы ихтимал, сөнки хөкүмәт бәлиғ булмағандарға спиртлы эсемлек һатыусыларҙы өс йылға төрмәгә ултыртыу хаҡында закон ҡабул итергә йыйына. Яңы ҡағиҙәләр һыра һатыуға ҡағылмай.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡ мөрәжәғәттәренә яуапһыҙ ҡараған етәкселәргә, чиновниктарға ҡаршы нисек көрәшергә?

**(Башы 1-се биттә).**

Һәр кем яҡшы итеп үҙ эшен башҡарырға тейеш, ләкин, үкенескә күрә, бюрократия ығы-зығыһын һаман булһа тамырынан ҡорота алмайбыҙ әле. Киреһенсә, ул тамырҙарын тағы ла кинерәк ебәрә. Шуға күрә лә ошо көндәрҙә генә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы сессияһы тарафынан "Башҡортостан Республикаһында административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында" кодекс ҡабул ителеүе бик урынлы, тип иҫәпләйем, сөнки унда граждандарҙың мөрәжәғәттәре тураһында БР закондарын һанламаған башҡарма органдарҙы, вазифалы кешеләрҙе административ яуапҡа тарттырыу саралары ҡарала. Тик күңелдә һаман бер шик ҡала: эшләмәгән закон өҫтөнә тағы ла закон ҡабул итеп кенә аныҡ һөҙөмтәгә өлгәшеп булырмы икән һуң?

***Зөфәр САФИН, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Дәүләт төҙөлөшө буйынса комитет рәйесе:*** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың булып үткән 39-сы ултырышында депутаттар тарафынан ҡаралған дүрт тиҫтәгә яҡын мәсьәләнең яртыһын республика закон проекттары тәшкил итте. Шулар араһындағы иң мөһим документтарҙың береһе - "Башҡортостан Республикаһында административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы кодексты өсөнсө уҡыуҙа ҡабул итеү булды. Был документ буйынса эште беҙ былтыр көҙ башлағайныҡ, ул киң йәмәғәтселек тикшереүенә ҡуйылды. Кодекс проекты буйынса эш барышында бик күп тәҡдимдәр ҡабул ителде, шуларҙың йөҙҙән ашыуы закон тексына индерелде. Һөҙөмтәлә, күпселек статьяларҙа административ штраф күләме арттырылды: йөҙ һумдан миллион һумға тиклем штраф күләме ҡарала. Бынан тыш, ҡабатлап ҡылынған хоҡуҡ боҙоуҙар нормаһы ҡаралды, был, әлбиттә, әлеге штрафтар күләмендә сағыласаҡ.

Законда административ хоҡуҡ боҙоуҙарҙың яңы өлөштәре хасил булды, мәҫәлән, умартасылыҡ өлкәһендә. "Башҡортостан Республикаһында йәмәғәт тәртибен һаҡлау тураһында" һәм "Төнгө ваҡытта граждандарҙың тыныслығын һәм тынлыҡ тәьмин итеү тураһында" закон проекттарының да ҡабул ителгән әлеге кодекс менән бәйләнеше һәм уртаҡлыҡтары бар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бер аҙнанан тамамлана. Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт теләндәге 10 “Ҡөрьән -Кәрим” китабы вәғәҙә итәбеҙ.**



Ауырғазы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит укыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәрегеҙгә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** ● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндә ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. ● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**. ● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн хаҡтар түбәндәгесә: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәстәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Перспективалы йәш педагогтарҙы асыҡлау, уларҙы дәртләндереү һәм социаль яҡлау ярҙам күрһәтеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Президенты "Башҡортостан Республикаһында йәш уҡытыусыларға гранттар тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 2012 йылдың 1 ғинуарынан республикала йәш уҡытыусылар өсөн 40-ар мең һумлыҡ гранттар булдырыласаҡ. Улар Башҡортостандың дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеларында иң яҡшы 25 педагогҡа ике йылға бер тапҡыр конкурс нигеҙендә биреләсәк. Был грантҡа 2-5 йыллыҡ педагогик эш стажы булған 30 йәштән уҙмаған уҡытыусы дәғүә итә ала.

✓Өфө тимер юл вокзалы янындағы майҙанда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яҡташтарыбыҙ иҫтәлегенә төҙөләсәк монументтың нигеҙ ташы һалынды. Сарала БР Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.

✓БР Президенты Иглин районына сәфәрендә гәҙәттән тыш хәл арҡаһында зыян күргән Урман ҡасабаһын төҙөкләндереү барышын ҡараны. Мәктәптә капиталь ремонт эштәре бара һәм ул 1 августа тиклем тамамланасаҡ. Шартлауҙан имен ҡалған торлаҡ йорттарҙа төҙөкләндереү эштәре алып барыла, ә бөтөнләй торлаҡһыҙ ҡалғандар өсөн 13 бина һәм күп фатирлы 3 йорт төҙөлә.

✓Йыл башынан республика урмандарында 56 янғын сыҡҡан. Янғын майҙаны 381 га тәшкил итә. Республиканың урман фонды 200 мең һумлыҡ зыян күргән. Һуңғы тапҡыр янғындар Белорет һәм Йылайыр урмандарында теркәлгән. Мәғлүмәттәр буйынса быйыл урман янғындары былтырғы менән сағыштырғанда байтаҡҡа аҙыраҡ.

✓Республикала бер нисә йыл инде мәктәп уҡыусыларына наркотиктар ҡулланыуға тест үткәрелә. Процедураны ябайлаштырыу өсөн быйылдан һуң тәүҙә уҡыусы балаларҙан анкета тултыртыласаҡ һәм шул юл менән хәүефле төркөм асыҡланасаҡ. Тесты ошо төркөмдәгеләр үтәсәк тә инде. 2009 йылда тест ярҙамында һәрби хеҙмәткә саҡырылған 76 мең егеттең - 150-һе, 2010 йылда 70 мең тикшерелеүсенең 85-е наркоман булыуы асыҡланған. Былтыр шулай уҡ 28 мең автомобиль йөрөтөүсе наркотиктарға тест үткән, уларҙың 78-е наркотик иҫереклек хәләндә булған.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БЕР КҮКТӘ...

## ике ҡояш булмай



**Тәү ҡарауға был әйтемдең төпкә һалынған мәғәнәһе тойолмаһа ла, уның варианттары күп. Уларҙы бар тулылығында тәфсирләй башлаһаң, тотош роман яҙырға мөмкин булыр ине. Варианттары араһында милли идеяға торошлолары ла бар.**

Эйе, бер күктә ике ҡояш булмай, шулай уҡ:

-Бер кешегә ике ғүмер бирелмәй. Ғүмер тик бер тапҡыр ғына булыуы менән дә ғәзиз, ҡәҙерле, әһәмиәтле, файҙалы. Ул ике тапҡыр бирелһә, кеше: "Ярай, быныһында нисек булһа ла көн итермен дә, икенсеһендә матур итеп йәшәрмен әле", - тип, намыҫ тигән төшөнсәне онотоп, тормошон ғазаплы көнитмешкә әйләндерер ине. Күптәр шулай итә лә. Ғөмүмән, кешенең аҫҡы аңына "иртәгә", "бергөһөн", "киләсәктә", "башҡа ваҡытта" тигән ғәмәлде башҡарыуҙы алғараҡ күсереү механизмы һалынған. Бының сәбәптәре ялҡаулыҡтамы, вайымһыҙлыҡтамы, үҙ тормошона битарафлыҡтамы - әйтеүе ҡыйын. Был хәлде йәндең ғүмерҙән-ғүмергә күсеп йөрөүе менән бәйләп аңлатыусылар ҙа бар. Бәндәнең йәне донъялыҡҡа кире әйләнеп ҡайтҡан хәлдә лә (дин быны инҡар итә), ул хәтерҙән айырыла һәм кеше бер үк хаталарҙы ҡабатлай башлай. Дини тәғлимәт буйынса әҙәм балаһы әхирәткә әҙерлек хәстәре менән йәшәргә бурыслы. Дөрөҫ йәшәү өлгөһө булып шәриғәт ҡанундары тора. Нисек кенә булмаһын, ғүмер кешегә бер генә бирелә, әгәр ҙә уның даналары күп булһа, йәшәүҙең ҡәҙере бөтөп, донъябыҙ хаосҡа әйләнер ине.

-Атай-әсәй, ватан бер генә. "Башҡаларҙы атаһы һәм әсәһе тип атаған һәм ҡабул иткән кеше үҙ ата-әсәһенә үлем теләй" тигән хәтәр яман әйтем дә бар. Шулай уҡ үҙ туғаны йөрөткән исемде яңы тыуған балаһына ҡушҡан кеше лә үҙ туғанына йә балаһына үлем теләй, тигән яҙылмаған ҡанун бар. Балаға исем ҡушыусы муллалар ҡушыласаҡ исемдең сабыйҙың ете быуын туғандары араһында булмауына инанғас ҡына ҡушырға бурыслы. Киреһенсә булған осраҡта бер үк исемде йөрөтөүсе ике туғандың береһенә әжәл килеүе бар. Һуңғы ваҡытта тағы бер күңелһеҙ күренеш модаға инеп бара. Бигерәк тә яңы өйләнешкән йәштәр кәләшенә йә кейәүенә эйәреп, үҙенең ҡайныһына - атай, ҡәйнәһенә йә бейеменә - әсәй, ҡайнағаһына - ағай, ҡайынбикәһенә - апай, һ.б. тип өндәшә башланы. Үҙ ата-әсәһе, үҙ ағаһы, үҙ апаһы була тороп та улар шулай тип өндәшә. Ә бит туған телебеҙҙә шундайын матур яңғырашлы "ҡайным", "ҡәйнәм", "бейемем", "ҡайнағам", "ҡайынбикәм", "ҡәйнешем", "балдыҙым", "бикәсем", "ҡайынһеңлем", "ҡайынеңгәм", "апһыным" һ.б. тигән һүҙҙәр бар икән, улар үҙ туғандарынды һаҡлау маҡсатынан да барлыҡҡа килгәнен аңлауы ҡыйын түгел.

Атай-әсәй бер генә булған һымаҡ, ватан да берәү генә. Беҙ "Тыуған еребеҙ - Башҡортостан, ватаныбыҙ - Рәсәй", тип әйтергә яратабыҙ. Рәсәй беҙҙең ватан түгел, Рәсәй - йәшәгән илебеҙ, ә ватаныбыҙ - Уралтау. Сөнки беҙ Рәсәй менән 450 йылдан ашыу ғына бергә йәшәйбеҙ, ә унан алдағы меңәр-меңәр йыллыҡ тарихыбыҙҙы ҡайҙа ҡуябыҙ һуң, улай булғас? Минеңсә, илендең, дәүләтселегендең исеме үҙгәргән хәлдә лә ватан төшөнсәһе күктәге бер ҡояш кеүек һис ҡасан да үҙгәрмәй торғанылыр. Ә бит донъяла ватанһыҙ ҙа илдәр һәм милләттәр бар.

Туған тел, милләт, рух бер генә. Кеше үҙе яҡшы белгән ике телде лә туған теле тип танығһа, ундай кешене бер юлы ике әсәнән, ике атанан тыуған кеше тип атарға мөмкин булыр ине. Юҡҡа ғына туған телде әсә теле тип атамағандарҙыр. Икенсенән, беҙҙең халыҡтың йолаһы буйынса кешенең ниндәй милләт вәкиле булыуы атайға ҡарап билдәләнә. Тимәк, әсәйең хет эфиоп, хет ҡытай, хет инглиз булһын, атайың башҡорт икән - һин башҡортһоң. Был осраҡта туған тел менән милләт тап килмәүе лә бар һәм кешенең ниндәй милләткә ҡарауын уның рухы билдәләй. Кеше бер үк ваҡытта ике рухлы була алмаған кеүек, ике милләттең дә вәкиле була алмай. Ике рухлы кеше - ике йөҙлө кеше.

Совет милләтен барлыҡҡа килтереү идеологияһын алға һөргән заманда интернациональ ғаиләләр термины хасил булды. Һөҙөмтәлә был сәйәсәт илде тарҡатыуға алып килде. "Әллә урыҫҡа бараһы, матур була балаһы", тигән таҡмаҡ та шул осорҙа барлыҡҡа килде. Миҫал өсөн, ситтән ҡарағанда "милләттәр ҡаҙаны" булып тойолған Америкала ҡатнаш никахтар нисбәте 3-5 процентты ғына тәшкил итә. Был ил психологтары, беҙҙең ил ғалимдарынан айырмалы рәүештә, ҡатнаш никахтарҙың кешеләрҙе әхлаҡи нормаларҙан (эскелек, наркоманлыҡ, бер енестәге кешеләрҙең бер-береһенә тартылыуы) ситләштереүсе сәбәптәрен ныҡ өйрәнеп, ошо йүнәлештәге системалы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә генә быға ирешә алған. Беҙ иһә һаман: "Ҡатнаш никахтарҙан тыуған балалар матур һәм аҡыллы була", тигән ҡараштабыҙ. Уның ҡарауы, әхлаҡи нормаларҙан ситләшеү йылдам рәүештә арта ғына бара. Милләттәрҙе бит Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән, йәмәғәт, әгәр ҙә ул быңдай бүленеште кәрәкле тип тапмаһа, барыбыҙҙы ла бер телле, бер рухлы, бер милләтле итер ине.

-Иман, инаныу, дин бер генә. Кеше бер үк ваҡытта мәсеткә һәм сиркәүгә ғибәҙәт ҡылырға йөрөй алмаған кеүек, уның иманы ла, инанысы ла берәү һәм үҙенеке генә. Һуңғы ваҡытта глобалләшеү, интеграция һылтауы менән "Аллаһы Тәғәлә берәү генә булғас, беҙ һәр бер диндең сифаттарын туплаған яңы уртаҡ дингә килергә тейешбеҙ", тип әйтеүселәр ҙә бар. Был үҙенә күрә совет осорондағы дөйөм совет халҡы барлыҡҡа килтереү сәйәсәтенә оҡшаған. Ул сәйәсәттең нимәгә алып килгәнен яҡшы беләбеҙ. Кеше йәнен ҡыйыусына ла (ил, халыҡ азатлығы, ватан өсөн һуғыштарҙан тыш) иманлы кеше тип әйтә алмайбыҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЮЛДАР ЙЫЛДАР ТУРАҺЫНДА УЙЛАТА...

Йыш ҡына беҙ, тормош ығы-зығыһында ҡайнап, эргәбеҙҙәге яҡындарыбыҙҙы иғтибар үҙәгенән төшөрөп ҡалдырабыҙ. Һөҙөмтәлә, эргәбеҙҙә эс серҙәребеҙҙе асып һалырҙай, күңел болоҡһоуҙарын таратырҙай бер кем дә юҡлығын күрәбеҙ. Ә эстә йыйылып килгән проблемаларҙы бушатмаһаң, икеләнеүҙәреңдән арынмаһаң, улар һине үҙҙәре эстән "кимерә" башлауы көн кеүек асыҡ. Был ҡуласанан ҡотолоу юлдары бармы һуң? Баҡһаң, бар икән.

Заман ағышынан артта ҡалмайым, тип, мин дә автомобиль алып ебәрҙем. Йайлап юл йөрөргә лә өйрәнеп алынды. Ә юлда йөрөгәс, юлсыларҙы ла ултыртып алырға тура килә. Төрлө кеше тап була: яҡшыһы ла, яманы ла, ихласы ла, аҫтыртына ла, һәйбәте лә, эсе боҙоғо ла. Ҡайһы берәүһе ун һумлыҡ аҡсаһын да 500 һумдай күреп тоттора. Хәйер, уныһы мөһим түгел, икенсе нәмәләр тураһында бәйән итмәксемен. Байтаҡ ваҡыт юл йөрөү дәүерендә үҙем өсөн ғәжәп асыш яһаным: әгәр пассажир һинең әңгәмәңә ихлас ҡушыла икән, үҙең дә һиҙмәҫтән, бар булмышыңды асып һалаһың. Дуҫыңа, туғаныңа, хатта ҡайһы берҙә тормош иптәшеңә лә асырға теләмәгән серҙәреңде теҙеп һалаһың һәм аҙағынан аңлатып булмаҫлыҡ рәхәтлек кисерәһең. Әйтерһең дә, өҫтөңдән бик ауыр йөк төшкәндәй була. Күп кенә осраҡта һинең юлдашың да шул уҡ хистәрҙе кисерә.

Кешеләргә асылып, күңелдәрҙе бушатыу беҙҙе бер нигә лә бурыслы итмәй. Йәғни, һөйләгән һүҙҙәрҙе был кеше бер кемгә лә асмаҫына беҙ ихлас ышанабыҙ. Сөнки күптәре менән уртаҡ таныштар ҙа булмай, уларҙы башҡаса осратмайһың да. Шуға ла, "бының турала әйтергә кәрәкмәгән икән" - тип борсолорға ла урын ҡалмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ислам динендә муллаға йә башҡа дин әһеленә барып, ярлыҡау һорау тигән төшөнсә юҡ. Котоликтарҙа бар быңдай ғәҙәт. Махсус бүлмә эсендә көйө пасторға алама эштәреңде һөйләп, үҙ гонаһтарыңа ярлыҡау һорау бүлмәһе бар. Тыңлаусы тәүбәгә килеүсене күрмәһә лә, уны иғтибар менән тыңлай һәм уның өсөн доға ҡыла. Осраҡлы юлдаштарыбыҙ ошо пасторҙар ролен үтәй бит.**

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә "Өфө ҡала округы Уставына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында"ғы проект тыңлауҙары булып үтте. Устав 2005 йылда ҡабул ителгәйне һәм 2008 йылда уға үҙгәрештәр индерелгәйне. Әлеге үҙгәрештәр федераль һәм республика кимәлендә сығарылған яңы закондар менән бәйле. Мәҫәлән, Өфөлә лә контроль-иҫәп органы булдырыласаҡ. Шулай уҡ баш ҡаланың рәсми символдары буйынса ҡайһы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк. Тағы бер яңылыҡ индерелә: бынан һуң баш ҡала Советына һайланасаҡ депутаттарҙың 50 проценты - партия исемлеге, 50 проценты бер мандатлы округтар буйынса һайланасаҡ.

✓Республиканың банк берләшмәһе вәкилдәре Көньяҡ Урал районДарында күсмә ҡабул итеүҙәр ойоштора. 28 июндә - Әбйәлилдә, 29-да - Баймаҡта, 30-да Хәйбуллала үтәсәк осрашыуҙарға консультация алырға теләүсе граждандар саҡырыла.

✓Йырсы һәм ҡурайсы Юнир Һағынбаев Хакасияла үткән "От Ыры" II халыҡ-ара этник эстрада фестивалендә өсөнсө урын яуланы. Был сара республикала 2008 йылдан алып уҙғарыла. Шул йылда Башҡортостандан барған йырсы Марсель Ҡотоев фестивалдең Гран-приһын яулағайны.

✓27 июндә үтәсәк Йәштәр көнөндә БР Хөкүмәтендә Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһын тапшырыу тантанаһы була.

✓Континенталь хоккей лигаһы 2011/2012 миҙгеленең КХЛ чемпионаты календарын раҫланы. Киләһе миҙгелдә КХЛ ике конференцияға бүленгән 24 команда форматына яңынан ҡайтасаҡ. Чемпионат 7 сентябрҙә Гагарин Кубогының былтырғы финалистары - "Салауат Юлаев" менән "Атлант" араһындағы матч менән башланып китәсәк. "Салауат Юлаев" быйыл да Омскиҙың "Авангард"ы, Астананың "Барыҫ"ы, Новосибирскиҙың "Себер"е, Новокузнецкиҙың "Металлург"ы һәм Хабаровскиҙың "Амур"ы менән бергә Чернышев Девизионында уйнаясаҡ. Был чемпионатта быйыл беренсе тапҡыр Словенияның Попрада ҡалаһының "Лев" хоккей командаһы ҡатнаша. "Лев" үҙенең тәүге уйынын үҙҙәрендә Омскиҙың "Авангард"ы менән 10 сентябрҙә үткәрәсәк. "Салауат Юлаев" был команда менән Өфөлә 18 октябрҙә осрашасаҡ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ӨФӨЛӨЛӘР... үҙ ҡалаһы менән ҡәнәғәт

**Күпселек өфөләләр баш ҡалалағы тормош менән ҡәнәғәт. Иң ҙур рейтинг агентлыҡтарының береһе үткәргән тикшереүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, "Һеҙгә үҙ ҡалағыҙҙағы йәшәү оҡшаймы?" тигән һорауға 85 процент респондент ыңғай яуап биргән.**

Һорау алыу, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан тыш, Рәсәйҙең 20 эре ҡалаһында үткәрелгән. Үҙ ҡалаһын иң ныҡ яратыусылар тип Красноярск ҡалаһы халҡы табылған (87 процент ыңғай яуап). 86 процент менән икенсе урында Ярославль, Краснодар һәм Ҡаҙан ҡалалары. Өфө Ростовтағы Дон һәм Түбәнге Новгород ҡалалары менән өсөнсө урынды бүлешә.

Шулай уҡ респонденттар тәҡдим ителгән 15 варианттан ҡалаларында иң ныҡ үҫешкән өлкәне һәм йәшәү параметрын да билдәләгән. Улар - хәүефһеҙлек; балалар баҡсалары һәм мәктәптәр, юғары уҡыу йорттары; йәмәғәт транспорты; автомобиль юлдары; һәйбәт эш урындары алыу мөмкинлеге; тауарҙарҙың һәм хеҙмәтләндереүҙең яҡшы үҫешеүе; экология; медицина; театрҙар һәм кинотеатрҙар; кафе, ресторан һәм клубтар (аралашыу урындары); парктар һәм скверҙар (ял итеү урындары); халыҡтың мәрхәмәтлелеге һәм алсаҡлығы; бер-береңә ярҙам итеү кимәле; унайлы торлаҡ.

Асыҡланыуынса, ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәрҙе, тәү сиратта, кафе һәм клубтарҙың (58 процент), театр һәм кинотеатрҙарҙың (38 процент) үҫешкәнлеге, тауар һәм хеҙмәтләндереүҙең (36 процент) яҡшы булыуы ҡәнәғәтләндерә.

Иң оҡшамаған күрһәткестәр: бер-береңә ярҙам итеүҙең юғала барыуы (2 процент), экология (3 процент) һәм яҡшы эш урындары булмауы (4 процент).

Нимәһе иғтибарға лайыҡ: өфөләләрҙең иң яҡшы һәм иң насар йәшәү параметры буйынса фекере тулыһынса бөтә Рәсәй респонденттары фекере менән тап килә.

Билдәләп үтергә кәрәк: ҡала йәмәғәт транспорты эше менән ҡәнәғәт булыусылар араһында Өфө тәүге урынды биләй (27 процент). Икенсе урында - Пермь (24 процент), өсөнсө урында - Ҡаҙан, Ярославль һәм Новосибирск (23 процент).

БЕЛЕМ УСАҒЫ



# МАҠСАТЫНА ТОҒРОЛАР

**Йәй - һөнәри киләсәген билдәләгән йәштәр өсөн дә, яңы быуын абитуриенттарын көткән уҡыу йорттары өсөн дә яуаплы осор. Заман талаптарына яуап бирер белгестәр әҙерләү халыҡтың иртәгәһе көнөн хәстәрләү икәнен аңлап эш иткән Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы республикабыҙҙың көньяҡ төбәге өсөн төп юғары уҡыу йорто иҫәпләнә. Уның ректоры вазифаһын башҡарыусы Илгиз Раян улы Ҡәҙерғоловҡа академия тураһында бер-нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

➔ **Илгиз Раян улы, академияның ил мәғарифындағы урынын нисек билдәләр һегеҙ?**

- Беҙҙең академия - 70 йыллыҡ тарихы булған уҡыу йорто. Ул 1940 йылда уҡытыусылар институты булараҡ барлыҡҡа килгән. 1954 йыл Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты тип үҙгәртелһә, академия статусын 2004 йылда алды. 2008 йылдан уға Башҡортостандың беренсе халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исемен биреү ҙур ваҡиға булды. Тарихынан һәм тәжрибәһенән күренеүенсә, бына шул йылдар буйына уҡыу йорто үҙенең юғары маҡсатына тоғро ҡала - йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреүсе уҡытыусылар әҙерләй. Беҙ әҙерләгән уҡытыусылар бөгөн республиканың бар төбәктәрендә лә эшләй, хатта күпселекте тәшкил итә.

70 йыл эсендә беҙҙең уҡыу йортон 40 меңгә яҡын белгес тамамлаған. Был бит бик ҙур һан. Уйлап ҡараһаң, ошо дәүер эсендә беҙҙең юғары уҡыу йорто эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә республикабыҙҙың, илебеҙҙең мәғариф системаһы өсөн күпме кадр әҙерләнгән. Әгәр ҙә академияны тамамлаған йәш көстәрҙең бөтә социаль даирәләрҙә лә: белем биреү, мәҙәни, киң мәғлүмәт, халыҡты социаль яҡлау, йәштәр менән эш, хоҡуҡ һаҡлау өлкәләрендә эшләүен, дәүләт, йәмәғәт эшмәкәрҙәре булып китеүен иҫәпкә алһаҡ, вуздың ил тормошонда уйнаған роле ҙур булыуы күренә.

➔ **Вуз бөгөн ниндәй йүнәлештәрҙә абитуриенттар ҡабул итә?**

- Бөгөнгө көндә академия 7 факультетты берләштерә: башҡорт филологияһы, педагогика һәм психология, математика һәм тәбиғи фәндәр, тарих, филология, технология һәм эшҡыуарлыҡ, иҡтисад һәм идара итеү факультеттары. Академияла юғары сифатлы белем алыу, үҙендә төрлө яҡтан үҫтереү, камиллаштырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар, вуздың матди базаһы ныҡлы. Беҙ заман шарттарында конкуренцияға һәләтле белгестәр әҙерләү өсөн эшләйбеҙ.

➔ **Һеҙҙең вузда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын әҙерләү мәсьәләһе нисек ҡуйылған?**

- Был маҡсатты башҡорт филологияһы факультеты бойомға ашыра. Факультетта уҡыу бер юлы ике белгеслек буйынса белем алыу яғынан отошло: унда башҡорт теле һәм әҙәбиәте белгеслеге менән бергә рус теле, сит тел (инглиз теле), тарих уҡытыусылары әҙерләнә. Быйылғы йыл көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлеге өсөн ҡабул итеү имтихандары - рус теле (БДИ), йәмғиәтте өйрәнеү фәне (БДИ). Мәктәптә башҡорт теле буйынса имтихан (БРИ) биреп өлгөрмәгәндәр һынауҙы академияла бирәсәк.

➔ **Педагогия колледждарын тамамлаусылар өсөн айырым шарттар ҡаралғанмы?**

- Эйе, улар уҡырға ингәндә академияла вуз материалдары буйынса һынау тотасаҡ. Теләгәндәр түләүле нигеҙҙә 3,5 йыл белем алыу мөмкинлегенә эйә.

**Рита ФӘТҠУЛЛИНА**
**әңгәмәләште.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫНДА... ҡыҙыу ваҡыт

**Рәсәй вуздары, шул иҫәптән Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары абитуриенттарҙан документтар ҡабул итә башланы. Ҡабул итеү комиссияһы хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, документтар ҡабул итеү 25 июлгә тиклем дауам итәсәк.**

Әгәр ҙә вузда ижади йәки һөнәри йүнәлеш буйынса өҫтәмә һынауҙар бар икән, документтар ҡабул итеү 2 июлдә тамамлана, ә уҡырға инеү өсөн профилле йүнәлеш буйынса өҫтәмә имтихандар тапшырырға кәрәк булған уҡыу йорттарында документтарҙы 10 июлгә тиклем алаҫаҡтар. БДИ тапшырмаған элекке йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары тест тапшырыу өсөн 5 июлгә тиклем теркәлергә тейеш, быйыл абитуриенттар өсөн документтар ҡабул итеү ваҡыты - 10 июлгә тиклем.

Быйыл да документтарҙы уҡыу йортона почта аша ебәрергә мөмкин, иң мөһиме - һуңламаҫҡа. Былтырғы ҡабул итеү комиссияһы тәжрибәһе күрһәтеүенсә, июлдә почта бүлексәләре хаттарҙы эшкәртеп һәм адресаттар буйынса таратып өлгөрмәй. Әгәр ҙә документтар араһында ниндәйҙер ҡағыҙ етешмәй икән, ҡабул итеү комиссияһы ғаризаны теркәмәй - был документтарҙы почта аша ебәреүҙең тағы бер етешһеҙлеге. Хәҙер күп кенә вуздарҙың рәсми сайтында ниндәй документтар кәрәклеге тураһында ентекле мәғлүмәт табырға була, ошонда уҡ йыш осраған хаталар тураһында ла әйтелә. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт университеты тураһындағы бар мәғлүмәтте www.bashedu.ru адресынан таба алаһығыҙ. Һәр абитуриенттың үҙе менән түбәндәге документтары булырға тейеш: шәхесте һәм гражданлыҡты раҫлаусы документтың төп нөсхәһе йәки ксерокопияһы, белем тураһындағы дәүләт таныҡлығының төп нөсхәһе йәки ксерокопияһы, БДИ һөҙөмтәләре тураһындағы таныҡлыҡтың төп нөсхәһе йәки ксерокопияһы.

Республика вуздарында документтар ҡабул итеү ҡағиҙәләре шул көйө ҡалған. Ҡайһы бер вуздарҙа яңы һөнәрҙәр ҙә асылған. Башҡорт дәүләт университетында "культурология", "химик технологиялар", "бизнес-информатика" йүнәлештәре буйынса белгестәр әҙерләй башлаясаҡтар. Вузда гуманитар йүнәлештәргә айырыуса иғтибар бирелә.

Абитуриенттар бөтәһе биш вузға һәм уларҙың һәр береһендә өс йүнәлеш әҙерлеге буйынса бер юлы документ тапшыра ала. Ҡабул итеү комиссияһында абитуриент тураһындағы бар мәғлүмәт берҙәм мәғлүмәт базаһына индерелә. Ошо уҡ базала БДИ һөҙөмтәләре лә туплана. 27 июлгә ҡарай вуздарҙың рәсми сайтында ғариза биреүселәрҙең исемлеге баҫылаcаҡ. Уҡырға ҡабул ителеүселәрҙең тәүге исемлеге 30 июлгә әҙер була. Кемдәр документтарының төп нөсхәһен билдәләнгән ваҡытҡа алып килеп өлгөрмәй, уларҙы уҡыу йортона ҡабул итмәйәсәктәр. Икенсе исемлек 5 августа билдәле буласаҡ.

**Олег ШАКИРОВ.**
**"Башинформ".**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәктәп һәм мәктәпкәсә балалар учреждениеларында балаларҙың туҡланыуын ойоштороу тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, былтыр Өфө мәктәптәрендәге 95822 уҡыусының 98 проценты өсөн туҡланыу ойошторолған. Иртәнге аш уларға 28 һумға, төшкө аш 33 һумға төшкән. Ике йыл эсендә 34 мәктәптең аҙыҡ блоктары капиталь ремонт үткән. Быйыл шундай ремонт эштәре тағы 10 мәктәптең аҙыҡ блогында үткәреләсәк. Тағы бер ҡыҙыҡ мәғлүмәт: мәктәп ашханаларында алюмин һауыт-һаба, сәнске-ҡалаҡтар тулыҡмай торған тимерҙән яһалғанына алыштырыла.

✔Өфөлә июндә урам акцияһы сиктәрендә балиғ булмағандарға алкоголь һатыуға ҡаршы пикеттар ойошторолдо. Был пикеттарҙы Алкоголгә ҡаршы фронт ойошмаһы үткәрҙе. Балиғ булмаған балаларға алкоголь һатҡан өсөн штраф күләме бөгөн 2 мең һум тәшкил итә. Магазин хужалары өсөн был артыҡ ҙур сумма түгел, шуға ла штраф һалып ҡына был мәсьәләне хәл итеп булмаясағын аңлаған ойошма ағзалары пикет ойоштороп, бар йәмәғәтселектең иғтибарын был проблемаға йүнәлтеү ысулын һайлаған. Алкоголгә ҡаршы фронт эшендә әүҙем ҡатнашыусылар Өфөнөң күп кенә магазиндарында булып, һатыусылар менән аңлатыу эштәре алып барған. Тағы бер айҙан тикшереү ҡабаттан үткәреләсәк.

✔Оператив кәңәшмәлә хакимиәттең мәғариф идаралары начальнигы Азамат Сәйфуллин сығыш яһаны һәм быйылғы республика мәғариф кәңәшмәһенең 19 августа үтәсәге тураһында хәбәр итте. Ул "Динамикалы үҫешеүсе мәғариф - тотороҡло үҫешеүсе төбәк" тигән темаға арналасаҡ һәм Өфөлә үтәсәк. Конгресс-холдағы пленар ултырыштан һуң дүрт дискуссия майҙансығы эшләйәсәк.

✔Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фонды һәм "Дошкольная Уфа" журналы "Семья" сауҙа-күңел асыу комплексы алдында ваҡ аҡса йыйыу акцияһы үткәрҙе. 27 майҙа һәм 4 июндә үткән акция ваҡытында 98 мең 650 һум 77 тин аҡса йыйылғайны. Ул аҡсалар 17-се балалар ҡала клиник дауаханаһында дауаланыусы бәләкәй пациенттар өсөн учреждение ихатаһында балалар ҡаласығы төҙөүгә тотоноласаҡ. 24-дә был акция тағы ла ҡабатланды.

✓ *Уҡыу өсөн льготалы кредит алыуға эш баҙарында ҙур һорау менән файҙаланған йүнәлештәр буйынса һәм сифатлы белем биргән юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән студенттар иҫәп тота ала.*

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# КРЕДИТ АЛЫРҘАН АЛДА...

## түләренде лә уйла

**Йәй - кемгәлер бары тик ял итеү миҙгеле булһа, мәктәп сығарылышы уҡыусылары һәм уларҙың ата-әсәләренә борсоулы уйҙар һалған мәл. Йәй башы Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырыу менән үтһә, унан һуң уҡыу йорттарына инеү мәшәҡәттәре башкөллө үҙ эсенә ала. Бөгөнгө заманда ниндәйҙер һөнәргә эйә булыу өсөн аҡыллы һәм уңған ғына булыуҙың әҙ икәнлеген барыһы ла аңлай. Күп осраҡта уларҙың аҡса менән нығытылыуы шарт. Ошоно иҫәпкә алып, кемдер оҙаҡ йылдар буйы аҡса йыя, кемдер ваҡыты еткәс, туғандарынан бурысҡа ала, кемдер иһә банкка кредит алырға йүгерә. Бөгөн, бар донъя кредитҡа йәшәгән ваҡытта, был ғәҙәти күренеш кеүек, ләкин банктарҙың төрлө кредит тәҡдим итеүен иҫәпкә алып иң ҡулайлы кредит продуктын һайлай белеү ҙә мөһим. Шуларҙың береһе - уҡыу өсөн кредит.**




Уҡыуҙы кредитлау - Рәсәйҙә ете йыл элек барлыҡҡа килгән тауар төрө. Бындай кредитты 18 йәше тулған Рәсәй гражданы алырға мөмкин. Уның даими эш урыны булыуы йәки даими килеме булыуы төп шарттарҙың береһе. Әгәр ҙә уҡыу йортона инергә теләүсе был шарттарға тап килмәһә, уның созаемщигы булып даими килеме булған ата-әсәһе йәки башҡа туғаны сығыш яһай ала. Банк, шулай уҡ биргән кредиттың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн залог - күсемһеҙ милеккә документтар - һораясаҡ. Бындай төр кредит алырға теләүсегә тағы ла бер иҫкәрмә: уҡыу йортона барлыҡ имтихандар тапшырылып, һеҙҙең ошо уҡыу йорто студенты икәнлегегеҙҙе иҫбатлаған ҡарарға ҡул ҡуйылғас ҡына һеҙ банкка кредит алыу өсөн мөрәжәғәт итә алаһығыҙ, сөнки кредит алырға теләүсе банкка паспорт, даими килеме хаҡында мәғлүмәт һәм мөлкәт өсөн документтан тыш, уҡыу йортоноң лицензия күсермәһен һәм студент менән төҙөгән килешеүен дә алып килергә тейеш. Банк кредитты хуплаған осраҡта, студент уҡыу осоронда ай һайын банкка үҙенең уҡыуын дәлилләүсе белешмә лә килтереп торорға бурыслы. Шулай уҡ кредит тарихын күҙәтеп барыусы кредит инспекторы башҡа төр документтар һорауы ла ихтимал.

Уҡыу өсөн кредит көндөҙгө, киске бүлектәрҙә һәм ситтән тороп белем алырға теләүселәргә бирелеүе мөмкин. Шулай уҡ кредитты уҡыу йортоноң тәүге курсында ғына түгел, ә артабанғы курстарҙа ла алырға була, йәғни, тәүҙә студент үҙе түләһә, ә аҙаҡҡы курстар өсөн түләү мөмкинлеге юҡ икән, ул банкка мөрәжәғәт итә ала. Уҡыу өсөн кредит иң әҙе - 3, иң күбе 11 йылға бирелеүе мөмкин. Уларҙың 5 йылы уҡыу ваҡытына инһә, ә ҡалған 6 йылы эшкә урынлашып, кредитты тулыһынса ҡаплау өсөн бирелә. Уҡыу йылдарында кредиттың төп суммаһы түгел, ә кредит менән ҡулланған өсөн процентлар ғына түләнә. Кредиттың максималь суммаһы кредиторҙың түләү мөмкинселегенән һәм уҡыу йорто ҡуйған сумманан сығып билдәләнә.

Банкка бирелгән документтарҙың ҡаралыу ваҡыты 10 эш көнөнән артмай. Кредитҡа ыңғай яуап алынһа, банк кредит линияһы аса һәм семестр йәки ярты йыл һайын күрһәтелгән иҫәпкә аҡса күсерә. Мөһим момент: уҡыу өсөн кредитты банк кредитор ҡулына аҡса менән бирмәй, ә уҡыу йорто менән килешеү нигеҙендә, иҫәптән иҫәпкә генә күсерә. Әгәр ҙә уҡыу йортонда аҡса бирәмеге булып доллар йәки евро һанала икән, һеҙ бындай төр кредит алыу мөмкинлегенән яҙаһығыҙ, сөнки был төр кредит, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, бары тик һумдарҙа ғына бирелә. Банк һеҙгә кредит бирүгә ризалыҡ биреп тә, инде килешеү төҙөү ваҡытында һеҙҙе тағы ла бер нескәлек көтөүе мөмкин: ул да булһа, банктың һеҙ уҡырға ингән уҡыу йорто менән килешеүе булмауы. Был осраҡта инде һеҙгә икенсе банк эҙләргә, йә булмаһа ҡулланыусы кредиты алырға ғына мөмкин буласаҡ, шуға күрә, тәү сиратта, банк һәм һайлаған уҡыу йорто араһында хеҙмәттәшлек итеү хаҡында килешеүҙең булыу-булмауы хаҡында асыҡлау мөһим. Уҡыу осоронда студент академик отпуск алһа, шул осорға банк кредит биреүҙе туҡтатып тора ала, йәғни бер йыллыҡ академик отпуск ваҡытында банк уҡыу йортона аҡса күсермәй, тимәк, кредитор ҙа был йыл өсөн банкка бурыслы түгел.

2009 йылдың 1 сентябренән Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, дәүләт аккредитацияһы булған юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән студенттарға уҡыуға льготалы кредит биреү тәжрибәһе үткәрелә, ул 2013 йылдың 31 декаберенә тиклем дауам итәсәк. Эксперименттың маҡсаты - уҡыуҙы кредитлауҙа дәүләт ярҙамының механизмын юлға һалыу. Был программала Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығы, Мәғариф буйынса федераль агентлыҡ, банктар, юғары уҡыу йорттары һәм заемщиктар (студенттар) ҡатнаша. Кредит уҡыу йортонда уҡыу ваҡыты менән бергә 15 йылға тиклем бирелә һәм студенттан даими килем хаҡындағы белешмәләр ҙә, созаемщиктар ҙа, кредитты ҡаплай алырлыҡ мөлкәткә документтар ҙа талап ителмәй, сөнки банкка дәүләт сумманың дүрттән өс өлөшөн субсидиялай. Уҡыуға льготалы кредит алыу өсөн төп ике шарт бар. Беренсенән - уҡырға инергә теләгән юғары уҡыу йортоноң дәүләт аккредитацияһы булырға һәм ул Мәғариф буйынса федераль агентлыҡ тарафынан экспериментта ҡатнашыу хоҡуғы алыусылар исемлегенә индерелгән булырға тейеш. Башҡортостанда өс юғары уҡыу йорто был экспериментта ҡатнашыу хоҡуғы алған, улар - Өфө дәүләт авиация техник университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты һәм Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһы. Икенсенән, студент "4" һәм "5" билдәләренә генә өлгәшергә тейеш, "3"-лө билдәһе тик ике сессияға бер тапҡыр ғына "рөхсәт" ителә. "Әгәр ҙә студент һәйбәт уҡып килеп тә, ниндәйҙер сессияһын яҡшы билдәләргә тапшыра алманы икән, артабанғы сессияһын һәйбәт билдәләргә тапшырғанға тиклем кредитлау туҡтатып тороласаҡ", тип белдерәләр Мәғариф министрлығында. Мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Владимир Миклушевский әйтеүенсә, уҡыу өсөн льготалы кредит алыуға эш баҙарында ҙур һорау менән файҙаланған йүнәлештәр буйынса һәм сифатлы белем биргән юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән студенттар иҫәп тота ала. Бөгөн республикала был экспериментта Рәсәйҙең Һаҡлыҡ банкы һәм "ПромТрансБанк" ЯСЙ ҡатнаша. Процент ставкаларының теүәл суммаһын банктарҙа белешеү кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Белем алыу, һәйбәт һөнәргә эйә булыу өсөн аҡса түгеү үҙен аҡлаясағына шик юҡ, сөнки ул ышаныслы киләсәкте тәьмин итеүсе вклад булып тора. Тик банктан "ваҡытлыса алып торған" сумманы икеләтә, өсләтә арттырып түләргә тура киләсәген дә иҫтән сығармайынса, кире һәм ыңғай яҡтарҙы үлсәп эш иткәндә генә был аҡсаларҙың файҙа килтерәсәгенә өмөтләнеп була.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Кәйеф күтәреү



Кәйеф күтәренке булһын өсөн шыйыҡлыҡты күп эсергә кәрәк, көнөнә 2-3 литр булһа, бигерәк яҡшы. Минераль һыу, еләк-емеш сәйе, йәшелсә һуттары бик файҙалы. Шыйыҡлыҡ организмдағы натрий күләмен кәметә, тыныс йоҡлата. Шыйыҡлыҡ менән бергә организмдан зыянлы матдәләр ҙә сыға.

### Шалфей

Теш ҡаҙнаһы ҡанап, ауыртып яфалаһа, ярты стакан һыуға 1 тамсы шалфей майы һалып, теште таҙартҡандан һуң ауыҙҙы сайҡатаһың.

Һәр иртә бер балғалаҡ тоҙ һәм аҙ ғына йылы һыу ҡабып, тоҙ онға әйләнгәнсе сәйнәргә кәрәк. Йотмаҫҡа. Был дауа теш ҡаҙнаһын нығыта, пародонтоздан да һаҡлай.

### Мелисса

Был үләнде халыҡ аҡ кесерткән тип тә йөрөтә. Һәр йәй һайын мелиссаның япраҡтарын йыйып киптереп алығыҙ. Кипкән 2 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, өҫтөн ябығыҙ һәм бер сәғәткә йылы урынға ҡуйығыҙ. Ашар алдынан 30-40 минут алдан ярты стаканлап эсергә. Был төнәтмә йөрәк сиренән, ҡан баҫымы күтәрелеүҙән, үт ҡыуығы, бөйөр шешенән, нервылар ҡаҡшауынан ҡотолорға ярҙам итә.

### Компресты дөрөҫ ҡуй

Тамаҡ ауыртҡанда өс йәшкә тиклем балаларға фәҡәт майлы компресс ҡуяһың. 3-4 ҡат марляны үҫемлек майына манырға һәм тамаҡҡа ябып, целлофан ҡуйып, өҫтән бер ҡат мамыҡ менән ҡаплағыҙ һәм киң бинт менән бәйләгеҙ. Майлы компресты 4 сәғәт тотаһың, уны алғас, баланың муйынын ҡоро әйбер менән урап ҡуяһың. Әгәр тире ныҡ ҡыҙарған булһа, балалар кремы һөртәһең.

### Кәзә майы

Күп балаға дарыу эсереү, укол ҡаҙау үҙе бер ғауға. Шуға күрә йүтәл, тымау тейһә, кәзә майы менән танау билен, арҡаны, күкрәкте һыларға кәрәк. Дарыу ҙа кәрәкмәй, бала ла йүнәлә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Баланың тормош ҡуйған талаптарға яуап бирә белеүе, донъя ҡуласаһында юғалып ҡалмауы нәҡ атайҙан килгән һыҙат. Ошо сифаттарҙы тәрбиәләй алған атай үҙенә һалынған төп бурыстарҙың береһен үтәгән тип әйтеп була.*



*АТАЙ ТӘРБИӘҺЕ*

# ИР ҠОРОНА ЕТКӘС ТӘ...

## унын аҡылына таянабыҙ

**Ғаиләлә алған тәрбиә һәр кемдең тормошонда ҙур роль уйнай. Әсәй балаларын үҙенең наҙы, йылыһы менән ураһа, атай иһә ғаиләлә һаҡлаусы һәм яҡлаусы ролен үтәй. Нәҡ атай ҡыҙ бала өсөн ир-ат тәртибенең, үҙ-үҙен тотошоноң беренсе өлгөһө булһа, ә малайҙар иһә, атаһы өлгөһө аша үҙенең эшләгән эшенә яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡарарға, ҡыйыулыҡҡа өйрәнә. Тик бындай сифаттарҙы тәрбиәләр өсөн, тәү сиратта, атай кешенең үҙенә лә ошо сифаттар хас булырға тейеш. Нәҡ шундай атайҙарҙың береһе Сәлихов Хәснулла Әбүбәкер улы Күгәрсен районы Бикес ауылында йәшәй. Оҙаҡламай үҙенең оло юбилейын туйласаҡ ихтирамлы атай тәрбиәһе хаҡында уның Өфөлә йәшәүсе кинйә улы Фәйзулла һөйләй.**

- Ғаиләлә, айырыуса малайҙар өсөн, атай абруйы ҙур әһәмиәткә эйә. Бәләкәй саҡта ла, әле лә атайым беҙгә, балаларына, ныҡлы терәк һәм таяныс була белде. Атайымдың әйткәндәре балалыҡтан сығып, ир ҡорона еткәс тә күңелемдә һаҡлана. Һаҡлана ғына түгел, ә ваҡыт үтеү менән ҡат-ҡат хәтер йомғағы һүтелеп, әйтелгәндәргә яңы күҙлектән сығып ҡарап, бәлки, балалыҡта аңлап етмәгән хәҡиҡәтте тәрәнерәк аңлайым кеүек. Элек уның ҡайһы бер һүҙҙәре, фекерҙәре менән килешеп тә етмәгәнмендер, ләкин ваҡыт үтеү менән уларҙың дөрөҫлөгөнә инанам.

Атайым бар районға билдәле балта оҫтаһы. 18 йәшендә беренсе өйөн һала, унан һуң инде иҫәпһеҙһанһыҙ өй, мунса төҙөнө, башҡа бик күп төҙәлөштәрҙә ҡатнашты. Ауылыбыҙҙың күрке булып ултырған мәсет тә уның эше. Ҡартатайым һуғыш яланында ятып ҡалыу сәбәпле, атайымды бәләкәй сағында өйрәтеүсе кеше лә булмағандыр, әммә ул үҙенең зирәклеге, әрһеҙлеге, сослоғо арҡаһында күршетирәләге ағайҙарға ҡарап, ғүмерлек һөнәренә әйләнгән балта, ағас эшенә өйрәнә. Һуғыш башланған йылда донъяға килгән атайым үҙ атаһын бер тапҡыр ҙа күрмәгән. "Хатта фотоһүрәте лә юҡ ҡарарға", - тип үкенесен белдерә ул. Ҡартәсәйем ике ҡыҙын һәм атайымды бер үҙе аяҡҡа баҫтыра, шуға күрә атайым бәләкәйҙән үк ғаиләнең яҡлаусыһы һәм һаҡлаусыһы, туйындырыусыһы була.

Әсәйебеҙ иртә мәрхүмә булды, шуға күрә ғаиләбеҙҙең тормош көсәре атайыбыҙ тирәләй әйләнде. Ул яңғыҙ ҡалыуына ҡарамаҫтан, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, донъя дилбегәһен ҡулында ныҡ тотоп, донъя көттө. Уның бар ауырлыҡтарҙы ла сабырлыҡ менән үткәрә белеүе, үҙ-үҙенә булған талапсанлығын, эш һөйөүсәнлеген күреп үҫтек. Беҙ унан бер ҡасан да ҡысҡырыу-аҡырыу һүҙҙәре ишетмәнек, ул кешелекле, ирҙәрсә матур мөғәмәләле һәм һәйбәт ғаилә башлығы, беҙҙең өсөн ғәҙеллек өлгөһө, дуҫ һәм иптәш, кәңәшсе булды һәм булып ҡала. Атайымдан беҙ олоно оололарға, кесене кесе итә белергә, тирәяҡтағыларға хөрмәт менән ҡарарға өйрәндек. Кинәйәле генә итеп урамда, ҡунаҡта үҙеңде нисек тоторға, кеше менән нисек аралашырға кәрәклеген дә аңлатты. Баланы, бигерәк тә кеше алдында, ҡысҡырып әрләүҙе атайым бер ҡасан да хупламаны. Һис ҡасан үҙ фекерен көсләп көсләп таҡманы.

Үҙ нәҫел-нәсәбен яҡшы белгән кеше - абруйлы кеше. Был йәһәттән дә атайымдың ҡыҙыҡһыныуы көслө. Ул үҙ шәжәрәһен ентекләп өйрәнә, ҡыпсаҡ ырыуының тарихы менән нықлап ҡыҙыҡһына. Уның ҡыҙыҡһыныуы беҙгә лә күскән һәм һәр береБеҙҙең тормошонда билдәле урын алып тора. Атайымдың тағы ла бер шәп сифаты - балаларында, ейән-ейәнсәрҙәрендә башҡортлоҡ рухы, үҙ еренә һәм иленә, халҡына оло һөйөү тәрбиәләүе. Был бер көнлөк йәки бер айлыҡ ҡына эш түгел, ә бала бишектә ятҡандан алып һис ҡасан туҡтатырға ярамаған мөһим тәрбиәүи эш икәнлеген атайым аша беләбеҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаиләлә атай елкәһенә ҡатмарлы ла, яуаплы ла вазифа йөкмәтелгән: баланың тормош ҡуйған талаптарға яуап бирә белеү-белмәүе, донъя ҡуласаһында юғалып ҡалмауы нәҡ атайҙан килгән һыҙат. Ошо сифаттарҙы үҙ балаларында тәрбиәләй алған атай тәбиғәт тарафынан үҙенә һалынған төп бурыстарҙың береһен үтәгән тип әйтеп булалыр.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

**Һәр ата-әсә балаһының синыфта иң аҡыллыһы, иң уңышлыһы булыуын теләй һәм бының өсөн баланың тик "бишле"гә генә өлгәшеүен талап итә. Бала алдынғы булһын өсөн нимә эшләргә, ниндәй алымдар ҡулланып тәрбиәләргә кәрәк? Ғөмүмән, баланан отличник яһап буламы? Бына белгестәр әйтеүенсә, "отличник" төшөнсәһе глобаль һәм абсолют түгел. Отличник уңышлы ла, уңышһыҙ ҙа була ала. Мәктәптә насар өлгәшкән ҡайһы берәүҙәрҙең аҙаҡтан матур итеп донъя көткән осраҡтарын да беләбеҙ, тимәк, тик "бишле"гә генә өлгәшеү тормошта барыһын да хәл итмәй.**

# МӘКТӘПТӘГЕ "БИШЛЕ"...

## тормоштағы "бишле"гә нигеҙме?



Әлбиттә, ата-әсәләрҙең балаһынан отличник яһау теләген аңларға ла, аңлатырға ла була. Беренсенән, улар бала бәләкәй саҡта уҡ уның мәктәпте тамамлағас ҡайһы вузға уҡырға барасағын хәл иткән һәм шуға ла кәрәкле белем базаһын тулыландырырға тырыша. Икенсенән, тик бишлегә генә өлгәшкәндәрҙе уҡытыусылар ярата. Был бигерәк тә башланғыс синыфтарҙа күҙәтелә, сөнки унда уҡытыусы бәрәү генә һәм уның фекере уҡыусы өсөн дә, уның ата-әсәһе өсөн дә бик мөһим. Өсөнсөнән, балаһын отличник итеп ата-әсә үҙенең амбицияларын ҡәнәғәтләндерә. Йәғни, был осраҡта балаң менән эстән генә ғорурланырға түгел, ә уның яҡшы билдәләре тураһында туғандарға, дуҫтарға, коллегаларға һөйләп, маҡтанып алырға ла була.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ата-әсәләр һәр саҡта ла баланың ҡыҙыҡһыныуҙары һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алмай. Ә балаға отличник статусы йөшәргә ҡамасаулауы ла ихтимал бит. Әлбиттә, ҡайһы бер балаға уҡыу еңел бирелә һәм ул бөтә фәндәрҙән дә өлгәшә ала. Тик бындай осраҡтар, дөрөҫөн әйткәндә, һирәк күренеш. Күпселек осраҡта тик "бишле"гә генә өлгәшеү өсөн бала көнө-төнө материалды ятлау менән булышырға тейеш. Һөҙөмтәлә, уның ял итергә лә, тиҫтерҙәре менән аралашырға ла, йәғни ғәҙәти тормош менән йәшәргә ваҡыты ҡалмай.

Тағы шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк. Халыҡта "Алма ағасынан алыҫ төшмәй" тигән әйтем бар. Әгәр ҙә үҙегеҙ мәктәптә уҡыған саҡта уҡыу буйынса артыҡ һөҙөмтәләргә өлгәшә алмағанһығыҙ икән, балағыҙҙан яҡшы билдәләр талап итмәгеҙ. Баланың ниндәй мәктәптә уҡыуы ла мөһим. Был мәктәптә уҡыусыларға ниндәй талаптар ҡуйыла, унда уҡыу өсөн балағыҙҙың белем кимәле етерлекме? Югиһә, ҡайһы бер ата-әсәләр баланың һәләттәрен иҫәпкә алмайынса, уны, әйтәйек, математика йүнәлешле синыфҡа уҡырға бирә. Ә бәлки, ул аҡыл йүнәлеше буйынса математик түгел, ә гуманитарийҙыр?

Балағыҙҙың мәктәптән алып ҡайтҡан "икеле"һе һеҙҙең "икеле"геҙ ул, ата-әсәләр. Нимә һуң ул өлгәшмәү? Тимәк, бала нимәнелер төшөнөп етмәгән йәки ятламаған. Бала дәрескә әҙерләнгәнме, юҡмы икәнен контролдә тотоу - бына быныһы тап һеҙҙең эшегеҙ. Әммә был уҡыусы бала менән бойороу тонында һөйләшергә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Ул өйгә эшен эшләгән саҡта ҡайыш тотоп эргәһендә торорға ла кәрәкмәй, һеҙ был процесты ситтән генә күҙәтә алаһығыҙ. Әгәр ҙә бала ысынлап та ниндәйҙер теманы төшөнөп етмәүен күрәһегеҙ икән, был предметҡа баҫым яһап, бергәләп шөғөлләнегеҙ, өҫтәмә күнегеүҙәр бирегеҙ. Ҡысҡырыу бында һеҙҙең ярҙамсығыҙ була алмай. "Икеле" менән донъя түңкәрелеп китмәй бит. Уға тауыш күтәреү, "Мәсьәләне һинә биргәндәр бит, үҙең эшлә", тип килеп тыуған проблема менән үҙен генә ҡалдырыу бөтөнләй ярамай. Был саҡта ул тәүҙә китапҡа текәлеп тик кенә ултырасаҡ, әммә бер нәмә лә эшләмәйәсәк, һуңынан алдаша, йәки кемдәндер күсерә башлаясаҡ, йәғни, проблема хәл ителмәйәсәк, ә ул төшөнөп етмәгән материал өҫтөнә яңылары өҫтәләсәк.

Бына шуның өсөн дә ата-әсәләр иғтибарлы, түҙемле булырға тейеш. Улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ дәрес әҙерләгән саҡта уның бүлмәһенә һирәк-һаяҡ ҡына инегеҙ. Бала өйгә эшен үҙе әҙерләгән саҡта ғына унда яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләнә. Етмәһә, уны ваҡыты-ваҡыты менән маҡтап та алһағыҙ, уның уҡыу менән бәйле проблемалары булмаясаҡ.

Уҡыусының ата-әсәһе уға тәрбиәсе түгел, ә дуҫ булһын, шул саҡта ғына ул донъялағы иң яҡын кешеләренә еңеүҙәре һәм еңелеүҙәре тураһында һөйләйәсәк, яҡшы һәм намыҫ менән уҡыясаҡ. Шуны ла онотмағыҙ: кешегә тормошта үҙ урынын табыу һәм уңышлы булыу өсөн мотлаҡ Виет теоремаһын белеү талап ителмәй. Франц Лебовиц әйтмешләй, "ысын тормошта, ышанығыҙ минә, бер ниндәй алгебра ла юҡ". Шуға ла балағыҙҙан отличник яһап маташмағыҙ, ә уны нисек бар, шулай яратығыҙ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Йәмилә МОРАТШИНА, психолог:** Баланан отличник яһарға хәл итерҙән алда һәр ата-әсә нықлап уйларға тейеш. Миҙалдың ике яғы булған кеүек, был мәсьәләнең дә ыңғай һәм кире яҡтары бар. Отличник бала шул тиклем уҡыуға мөкиббән китеп бирелә һәм хатта эргә-тирәһендә барған ваҡиғаларға битараф ҡала. Уны бер нәмә лә: тиҫтерҙәре лә, уларҙың нимә менән шөғөлләнеүе лә, нимә кейеүе лә ҡыҙыҡһындырмай. Баланың белем алыуға булған теләге насар түгел, тик бер туктауһыҙ китапҡа, компьютерға текәлеп ултырыу, хәрәкәт итмәү уның һаулығын ҡаҡшатыуы, әйтәйек, күҙҙәре насар күрә башлауына килтереүе ихтимал.

Отличниктар, ысынлап та, төрлө була. Уларҙың ҡайһылары бар материалды ятлап уҡый, улар өсөн уҡытыусы ҡуйған билдә һәм уҡытыусының, ата-әсәһенең уға ҡарата булған ҡарашы барыһынан да мөһимерәк. Шуға ла бындай бала насар билдә алһа, шунда уҡ борсола йәки илай башлай. Бындай осраҡтарҙа ҡайһы бер ата-әсә мәктәпкә килеп, уҡытыусынан насар билдәне яҡшыһына төҙәттерә. Быны һис тә эшләргә ярамай, сөнки бала быға күнегеп китеп, бөтөнләй уҡымай башлауы бар. Ә ҡайһы бер балаға уҡыу еңел бирелә һәм уны ниндәй билдә алыуы бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай.

Мәктәптә отличниктарҙы төрлө предмет уҡытыусылары үҙенең яғына тартҡылай, үҙенең фәне буйынса олимпиадаларҙа, конкурстарҙа ҡатнаштырырға тырыша. Ул быны йышыраҡ үҙенең рейтингын күтәреү өсөн ҡуллана һәм баланың ҡыҙыҡһыныуҙары икенсе планға күсә. Ҡайһы саҡта бындай балалар мәктәпте тамамлағас, ниндәй һөнәр һайларға теләгәнен дә аңламай, сөнки уның ҡыҙыҡһыныуҙары төрлө яҡҡа бүлгеләнгән. Шуға ла уҡыусы менән бындай проблема килеп тыуманһын өсөн синыф етәкселәре лә, ата-әсәләр ҙә иғтибарлыраҡ булырға тейеш.

Әле яңы ғына уҡыусылар мәктәптә БДИ тапшырҙы. БДИ отличник өсөн икеләтә стресс тыуҙыра, хатта баһа өсөн артыҡ борсолоп, тесты үтә алмауы ла бар. Отличник булған баланың үҙенә ҡуйған баһаһы юғарыраҡ була, шул уҡ ваҡытта унда яуаплылыҡ тойғоһо ла көслөрәк. Әгәр ҙә мин "икеле" алһам, уҡытыусымдың, ата-әсәйемдең өмөттәрен аҡламаясаҡмын, тип уйлай ул. Мәктәптә лә, һөнәр алғанда ла гел алдынғы булған балаларҙың тормошҡа ауырыраҡ яраҡлашыуын да билдәләп китергә кәрәк. Сөнки улар тормошта барыһы ла китапта яҙылғанса була, тип фекерләй һәм улар араһында ниндәйҙер айырма күреү менән баҙап ҡала.

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТ ЙӘЙЛӘҮҘӘРЕ



## Беҙ улар хаҡында нимә беләбеҙ?

### Бойороҡ - игенселек менән шөғөлләнергә

Борон-борондан башҡорттарҙың шәхси хужалығында малсылыҡ, йылҡысылыҡ өҫтөнлөк иткән. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем башҡорттар өйөр-өйөр йылҡылары менән йәйләүҙәргә сығыр булған. Хужалыҡтың бындай ысулы көньяҡ-көнсығыш, Көньяҡ Урал башҡорттарында ХХ быуаттың башына тиклем һаҡланған.

XVIII быуатта, бигерәк тә XIX быуатта, батша хөкүмәте йәйләүҙәр өсөн ҡулланылған йәйрәп ятҡан башҡорт ерҙәрен "буш" ятҡан ерҙәр тип, күпләп тартып ала, заводтар төҙөй, күпләп урыҫ крәҫтиәндәрен күсереп ултырта. Әүҙем колонизация сәйәсәте һөҙөмтәһендә башҡорттоң малсылыҡ, йылҡысылыҡ шөғөлө ҙур зыян кисерә. Ерҙәр кәмеү менән йылҡы башы ла ҡырҡа кәмей (быға, әлбиттә, кантонлыҡ идаралығы ла булышлыҡ итә), йәғни башҡорт халҡының иҡтисади нигеҙе ҡаҡшай. Был үҙ сиратында башҡортто бөлгөнлөккә төшөрә. XIX быуаттың икенсе яртыһында, бигерәк тә 70-80-се йылдарҙа халыҡ бик ауыр хәлдә тороп ҡала. Фәҡирлеккә төшкән башҡорттарҙың хәле тураһында рус яҙыусыһы Мамин-Сибиряк үҙенең әҫәрҙәрендә бик асыҡ яҙып ҡалдырған (уны гәзит уҡыусылар "Башкирия в русской литературе" китабының 2-се томында уҡый ала).

Батша хакимиәтенең урындағы власть әһелдәре башҡорт халҡының хәлен үҙҙәренсә яҡшыртырға тырыша. Йәйләүҙәргә сыҡмаҫҡа, игенселек менән генә шөғөлләнергә бойора, хатта урыҫ крәҫтиәндәренең кейемен кейеп йөрөргә ҡуша. Был бойороҡтоң үтәлешен контролдә тотоу өсөн ауылдар буйлап губернатор кешеләре йөрөй. Уларҙы башҡорттар урыҫ крәҫтиәне кейемендә ҡаршыларға тейеш була.

Губернатор башҡорттарҙы урыҫ крәҫтиәндәре кеүек тулыһынса игенсегә әйләндереп, "бәхетле" тормошҡа сығара алмағас, кәңәште уларҙың үҙҙәренән һорарға мәжбүр була. 1867 йылда башҡорттоң алдынғы ҡарашлы ир уҙаманы, кантон башлығы Әлмөхәмәт Ҡыуатов (Ҡаҙан университетының философия факультетының тел бүлексәһен тамамлаған, 1849 йылда тел ғилеме буйынса кандидат дәрәжәһен алған) генерал-губернатор Крыжановский канцелярияһына "Башҡорт халҡының фәҡирлеккә төшөү сәбәптәре" тигән яҙыу тапшыра. Ул унда башҡорттоң аҫаба ерҙәрҙен күпләп тартып алыу, ауыр хәрби хеҙмәт, чиновниктарҙың баш-баштаҡлығы халыҡты фәҡирлеккә ҡалдырған төп сәбәптәр, тип атап китә.

Шуға ҡарамаҫтан, батша хөкүмәте, урындағы хакимиәт башҡорттарҙың хәленә үҙ күҙлегенән сығып ҡарай. Урыҫ крәҫтиәндәренең хужалыҡ ысулын өҫтөнлөклө тип һанап, башҡорттар араһында ла ошо юҫыҡтағы сәйәсәтен дауам итә. Башҡорттоң йәйләүгә сығып мал көтөү ысулын батша хөкүмәте кочевка, кочевание тип атай. Башҡорт халҡының хужалығына ҡарата ҡулланылған ошо һүҙ ниндәйҙер бер ярлыҡ булып йәбешеп ҡала. Аҙаҡ совет тарих фәнендә "күсмә халыҡ" ярлығы, башҡорт революцияға тиклем артта ҡалған, тигәнде иҫбатлау өсөн ҡулланыла. Элек-электән бөгөнгө көнгә тиклем беҙҙең тарих китаптарында игенселек - алдынғы, ә малсылыҡ, йылҡысылыҡ артта ҡалған хужалыҡ ысулы, тигән фекер үткәрелә. Ошоноң һөҙөмтәһендә һаман да тарих дәреслектәрендә беҙ, элек башҡорттар хужалыҡ итеү йәһәтенән артта ҡалған, ә урыҫ крәҫтиәндәре алдынғы булған, тип уҡыйбыҙ. Һәм үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙан үҙебеҙ кәмһенәбеҙ.

### Башҡорт күсмә халыҡ түгел

Бөгөн дә ғалимдарыбыҙ үҙҙәренең хеҙмәттәрендә "Башкиры вели кочевой, полукочевой образ жизни" тип яҙа. Беҙ, уларға эйәреп, халҡыбыҙ күсмә тормошта йәшәгән, тип һөйләйбеҙ. Шуны балаларға уҡытабыҙ. Башҡорт халҡының борон йәйләүҙәргә сығыуын "кочевка", "полукочевой образ жизни" тип атау дөрөҫмө һуң? Юҡ, әлбиттә! Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, илһеҙ-ерһеҙ донъя гиҙеп йөрөгән сиғандар ҙа, аҫаба ерҙәренә йәбешеп ятҡан, унын өсөн күпме ҡанын түккән башҡорт халҡы ла шул уҡ "кочевой народ" тип аталамы? Был үҙе бер абсурд фекер түгелме һуң? Әйткәндәй, XIX быуаттың аҙағында уҡ урыҫтың аҡыллы зыялылары быны аңлаған. Мәҫәлән, 1873 йылда Башҡортостанда булып киткән М.В. Флоринский: **"Образ жизни башкир - по официальным сведениям, кочевой или полукочевой. На этом выражении я должен остановиться, потому что здесь вкралось или смешение понятий, или слово "кочевой" употребляется в официальных бумагах только по старой привычке. Ни того, ни другого условия башкиры не представляют. Все они без исключения имеют дома, живут в деревнях. Одно, что могло дать повод к закреплению за башкирами названия полукочевого народа - это обычай с наступлением весны переселяться в так называемые коши, т.е. войлочные кибитки, которые они, в виде лагеря, разбивают на своих полях и лугах. Впрочем, эти летние переселения существуют далеко не у всех башкир. И в этом случае так называемая перекочевка не служит выражением кочевых привычек, а просто обуславливается хозяйственными соображениями и удобствами. Они являются настолько же кочевым народом насколько можно назвать этим именем, например, дачников оренбургских"**, - тип яҙған. Күреп тороуығыҙса, Флоринский башҡорттарға ҡарата "кочевой" төшөнсәһен ҡулланыу төптө дөрөҫ түгел икәнлеген бик яҡшы аңлатып биргән. Флоринскийға ҡушылып, башҡорттарға ҡарата "кочевой" төшөнсәһенең дөрөҫ ҡулланылмауын раҫлаусы тағы бер дәлил килтереп киткем килә. Әгәр башҡорт халҡы хужалыҡ йәһәтенән йәйләүҙәргә сыҡҡан булһа, шул рәүешле Кавказ халыҡтары, хатта австриялылар ҙа йәй мәлендә малдарын Альп тауҙарының үренә ҡыуып, көҙөн төшөр булғандар. Әммә берәү ҙә "Австрийцы вели кочевое скотоводство", тип әйтмәй.

Бөгөн башҡорт тарихын яҙғанда, "кочевое скотоводство" урынына "отгонно-пастбищное скотоводство" төшөнсәһен ҡулланыу дөрөҫ булыр ине. Сөнки "кочевое" төшөнсәһе, тәү сиратта, билдәле бер урында тормай, йыл әйләнәһенә мал артынан күсенеп йөрөгән халыҡ, тигән мәғәнә бирә (ә урыҫтар борон-борондан тап шундай күсмә ҡыпсаҡ (половцы) ырыуҙары менән тығыҙ аралашып йәшәгән. Ҡыпсаҡтарҙың Ҡара диңгеҙ буйҙарында, Дон далаларында, йәғни ҙур территорияла йылҡылары менән күсенеп йөрөгәне билдәле). Башҡорттар улайтып күсенеп йөрөй алғанмы? Юҡ! Башҡортостанда борондан уҡ ерҙәр ырыуҙар (улар ил тип аталған) тарафынан үҙ-ара бүленгәнлеге билдәле. Икенсенән, беҙҙәге 30-40 градуслыҡ һыуыҡ ҡыштарҙа йыл әйләнәһенә тирмәлә йәшәү мөмкин түгел. Шуға күрә башҡорттарҙың борондан ҡышын тирмәләрҙә түгел, ә ағас йорттарҙа, ауылдарҙа йәшәгәнлеге бәхәсһеҙ.

**Азат ЮЛАН.**
**(Дауамы бар).**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Ибраһим Мортазин



Ибраһим Ғаззали улы Мортазин Ырымбур губернаһы Верхнеуральский өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың өс туған ҡустыһы. Беренсе донъя һуғышына алынып, унтер-офицер дәрәжәһендә ҡайта. 1918 йылда ағаһы Муса Мортазин менән Тамьян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия полкын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан ошо полк сафында хеҙмәт итә. Архив документтарында 1919 йылдың ғинуарында 1-се Башҡорт кавалерия полкы корнеты Муса Мортазин менән бергә 2-се эскадрон командиры прапорщик Мортазин телгә алына (ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112.). Ул Ибраһим Мортазин булырға тейеш. Башҡорт командованиеһы 1918 йылда милли армияны башҡорт командирҙары менән тулыландырыу маҡсатында Ырымбурҙа прапорщиктар курстары асып, элекке унтер-офицерҙарҙы уҡытып, прапорщик дәрәжәһенә күтәрә. Шулай уҡ улар яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн дә яңы званиеларға лайыҡ була. Мәҫәлән, герман һуғышынан кесе фейерферкер (артиллериялағы унтер-офицер дәрәжәһе) булып ҡайтҡан Муса Мортазин башҡорт ғәскәрендә корнет (кавалериялағы звание) чины ала.

Ибраһим Мортазин 1-се Башҡорт кавалерия полкы сафында 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға. Март аҙағында 1-се полк кире аҡтарға китә. Бында ул бригада кимәленә үҫеп етә һәм август аҙағында ҡабат ҡыҙылдар яғына сыға. И. Мортазин Башҡорт бригадаһы составында Урал фронтында казактарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур ҡалаһы янындағы Ҡарғалы биҫтәһендә тора.

1920 йылда Польша фронтында Ибраһим Мортазин Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының 28-се полкы менән командалыҡ итә. Фронтҡа килеү менән ул етәкселек иткән 28-се полк яуҙарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Ибраһим Мортазин үҙен ҡурҡыу белмәҫ, оҫта командир итеп күрһәтә.

"Киевтан сигенеп барыусы дошман 14 июндә бөтә көсө менән Зарудье ауылына ташланды. Ауылда башҡорт частары тора ине. Дошмандың 60-сы Краков пехота полкы иртә менән ҡапыл ғына көньяҡтан 27-се полк участкаһына бәреп инде лә полк штабын алды. Комбриг бригадаға ниндәй көс ябырылыуын асыҡлағас, полктарға Зарудьены алырға, дошманға ундағы күперҙе шартлатырға форсат ҡалдырмаҫҡа бойороҡ бирҙе. 28-се полк Ирша йылғаһының уң ярынан атакаланы. 1-се полк фронттан һөжүм итте һәм өс сәғәткә һуҙылған көслө һуғыштан һуң дошман ҡамауҙа ҡалды, уның бер өлөшө генә ҡулсаны йырып сыға алды; бер батальондың штабы, 18 пулеметы беҙҙең ҡулға күсте, 250 кешеһе тураҡланды, үҙебеҙҙең 27-се полк штабы ҡотҡарылды. Был һуғышта 28-се полк командиры И. Мортазин иптәштең сая батырлығын билдәләмәй мөмкин түгел", - тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

Бригада Киевтан сигенеп барған дошмандың артынан ҡалмай ҡыуа. 21 июндә 22-һенә ҡаршы төндә Башҡорт бригадаһы Игнатополь ауылын алып, шунда туҡтала. "Таң алдынан дошман, ике полкы менән беҙҙе һул яҡтан уратып үтеп һәм Жерев йылғаһындағы күпергә барып етеп, көтмәгәндә Игнатополде ҡаманы һәм бригада штабына һөжүм итте. Һаҡта торған полк, дошман бронепоезы утына эләгеп, сигенгән, һәм полк менән штаб араһында бәйләнеш өҙөлгән. 28-се кавалерия полкы, штабтың комендант командаһы һәм батарея (ике туп) ҡамауҙа ҡалды. Бригада частары сая һуғыштарҙан һуң төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә ҡулсаны өҙөп сыға алды; 28-се полк бернисә тапҡыр контратакаға ташланды һәм, ҙур юғалтыуҙар менән, ҡоралдарын һаҡлап килеп сыҡты, бригада штабын да сығарыуға өлгәште. Юғалтыуҙар: 28-се полк командиры И. Мортазин, эскадрон командиры Андреев, 60 ҡыҙылармеец үлде, 27-се полк штабы юғалды. Һуғыштың уңышһыҙ бөтөүенең сәбәптәре: элемтәнең насарлығы, яҡшы карталарҙың булмауы, һаҙ ерҙең һыбайлы сафтарға һуғышырға ҡамасаулауы", - тип яҙа Муса Мортазин.

Шул уҡ көндө бригада полктары тәртипкә килеп, сәғәт 16-ға Игнатополь ауылын яңынан баҫып ала. Батырҙарса һәләк булған 28-се полк командиры Ибраһим Мортазиндың кәүҙәһен ерләйҙәр.

Муса Мортазин "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" китабында "Башҡорт частарының граждандар һуғышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән яугирҙарының исемлеге"ндә Ибраһим Мортазинды Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде, тип яҙа. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" исемле китапта (Мәскәү, 1926) уның исеме телгә алынмай. Ибраһим Мортазин тураһындағы мәғлүмәт был китапҡа ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында инмәй ҡалғандыр, ахыры. Сөнки ул китапта Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәевтың да исеме юҡ. Ләкин уның Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе яҡшы билдәле.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

***✓ Ике йылдан беҙҙе студсоветҡа саҡыртып, бик ныҡ "тетмәбеҙҙе теткән" теге комендант егетте эскелек өсөн институттан ҡыуып сығарыуҙары мәғлүм булды. Дүрт курсын да тамамлап өлгөрмәне, меҫкен...***



**Тормошта әҙәм балалары менән йыш ҡына шундай ҡыҙыҡ хәлдәр булып тора. Әйтерһең, ниндәйҙер күҙгә күренмәгән бер көс һинең менән булған ошо хәлдәрҙе бик көслө контролдә тота, уларға тейешенсә йүнәлеш биреп, ваҡиғаларҙы үҙенсә ҡора. Тормош күренештәренә бер аҙ битараф булмаған иғтибарлы кеше ошо ваҡиғаларға тәрән мәғәнә бирә, уйланырға мәжбүр була торғандыр, тим... Үҙемдең ҡайһы бер һығымталарымды тәҡдим итәм уҡыусылар иғтибарына, бәлки, уны дауам итеүселәр ҙә булыр әле. Һеҙҙең менән дә шулай булғаны бармы, тигән һорау ҙа ҡуям.**

# Һауаға ҡарап төкөрмә...

## төкөрөгөң төшөр битеңә

### Юғалтһаң - ҡайғырма, тапһаң - ҡыуанма...

Етмешенсе йылдар аҙағы. Баш ҡалабыҙҙа Башҡорт дәүләт медицина институты студенты булып йөрөгән саҡ. Ул ваҡытта, башҡа студенттар кеүек, мин дә Башҡорт дәүләт академия драма театры спектаклдәренә үлеп ғашиҡмын. Студент аҡсаһы наҡыҫ ҡына булыуына ҡарамаҫтан, бер генә лә премьераны ҡалдырған юҡ. Быны яратҡан артистарымдың уйнауын ҡарарға зауыҡ итеп, халыҡ шығырым тулы драмтеатр кассаһына ынтылам. Ҡулыма ҡыҙыл унлыҡты (ул саҡтағы һәүетемсә ҙур ғына аҡса, айырыуса студент өсөн) йомған килеш, этешә-төртөшә көскә билет кассаһына барып еттем. Еттем тигәс тә, әллә ни барып та етмәнем, әммә ҡулымды касса ауыҙына тығыуға ирештем. "Ике билет!" тип ҡысҡырып, усымдағы аҡсаны кассир өҫтәленә ташларға ғына өлгөрҙөм, халыҡ баҫымы көсө мине ситкә шылдырҙы. Ул ғына ла түгел, сираттан (әгәр был мөхшәрҙе сират тиеп атап булһа) бөтөнләйгә этелеп сығып киттем. Ситтән генә тороп, кассир апайҙың "Кемгә ике билет?" тигән һорауын көтәм. Бер сәғәт тирәһе көткәнмендер. Һуңынан, билет һатылып бөткәндән һуң, кассаға барып, үҙемдең ике билетымды һәм сдача аҡсаһын талап иткәс, кассир апайҙың күҙҙәре дүрт булды. Бигүк әҙәпле булмаған формала апай бер кемдән дә ун һум алмағанлығын миңә асыҡ ҡына итеп аңлатып бирҙе. Ундай яуапҡа тиҙ генә төшөнөргә теләмәгән мин үҙемдекен бер нисә мәртәбә ҡабатланым. Әммә минең дә шаҡтай ғына юғары тонда әйтелә башлаған талабым шартылдап ябылған касса ишегенә ҡыҫылып ҡалды...

Бер нисә көндән, сираттағы спектаклгә билет алырға тип, бер лекциямды ҡалдырып, театрға иртәрәк килдем. Инһәм, касса тирәһендә, исмаһам, бер әҙәм заты юҡ. Уның ҡарауы, иҙәндә, касса тәҙрәсеге тапҡырында ҡыҙыл ғына унлыҡ аҡса аунап ята. "Кемдеке?" тиеп һорар инем, яҡын-тирәлә бер кеше лә юҡ. Теге кассир апай ҙа әле эшкә килмәгән. Әлбиттә, был унлыҡ әлеге мин юғалтҡан аҡса түгел (унан алып нисәмә көн үтте, күпме спектакль булды). Аҡсаны кеҫәгә һалып алғас, ни өсөндөр, кассирҙы артабан көтөп торғо килмәне, сираттағы лекцияма йүгерҙем...

Бер мәл, дүртенсе һанлы дөйөм ятаҡтың залында кемдеңдер өҙөлөп төшөп ҡалған алтын сылбырын табып алдым. Һорашып та эйәһе табылмағас, "үҙемә яҙған малдыр", тип уйланым һәм был ҡиммәтле табышты ҡағыҙға төрөп, кеҫәмә һалып алдым. Шул көндө үк ювелирға алып барып күрһәткәс, тегеһе табышымдың юғары ғына пробалы затлы әйбер икәнен әйтеп шатландырҙы. Ә кискә табан, алтынымды күрһәтеп, егеттәр алдында бер аҙ маҡтанып алырға тип кеҫәләремдә ҡапшайым, әммә бер ни ҙә тапманым. Нисек килһә - шулай китте...

### Табынға саҡырмағайныҡ шул

Һаман да шул студент саҡ. Шәмбе көндәрҙең береһендә тыуған көнөмдө үткәрергә тура килде. Ятаҡ бүлмәһенә бер нисә иптәш егет тә килгәйне. Кәйеф өсөн бер аҙ ғына "төшөрөп" алдыҡ. Гармун тартып, егеттәр менән башҡортса йырлаша башлағас, бүлмәгә комендант килеп инде. Комендант беҙҙән ике курсҡа түбән уҡыған студент ине. Беҙҙең менән аралашҡыһы, бергәләп күңел асҡыһы килә быныһы, күренеп тора. Тик ни өсөндөр уны табынға саҡырып ултыртырға күңел тартманы... Иртәгәһен беҙҙе студсоветҡа саҡыртмаһындармы! Хәҙер нисектер, - белмәйем, әммә ул саҡта студсовет бик ҡаты булды, берәүҙе лә аяп торманы. Һөҙөмтәлә беҙ дөйөм ятаҡта йәшәү хоҡуғынан яҙҙыҡ. Күңелле генә йырлашып, бейешеп ултырыуҙы иҫәпкә алмағанда, әллә ни эш тә боҙмағайныҡ та, әммә... ғәйеп үҙебеҙҙә.

Шулайын - шулай. Әммә ике йылдан беҙҙе студсоветҡа саҡыртып, бик ныҡ "тетмәбеҙҙе теткән" теге комендант егетте эскелек өсөн институттан ҡыуып сығарыуҙары мәғлүм булды. Дүрт курсын да тамамлап өлгөрмәне, меҫкен...

### Генералдың нахаҡҡа ғәйепләүе

Мин әлегә йәш доктор, полк медицина пунктының начальнигы, лейтенант званиеһында ғынамын. Иртәгә Мәскәү үҙәк госпиталенә хирургия буйынса камиллашырға ярты йылға уҡырға китергә тейешмен. Самолетҡа билет та алынған. Тап шул көндө дивизия командиры генерал Крыжко полкты тикшерергә килде. Ни өсөндөр, был генерал медицина офицерҙарын яратып етмәй ине. Уның әйтеүе буйынса, беҙ - "бездельниктар" . Медпункт ишегенең ике яғында ике янғын һүндергес элеүле тора. Тора ла тора. Уны берәү ҙә алып тикшергәне юҡ. Тап генерал инеп килгән мәлдә шуларҙың береһенең ҡапҡасы атылып китмәһенме! Ә уның эсенән... Юҡ, ут һүндерә торған күбек түгел, ә күбекләнеп, "хуш еҫтәр"е аңҡып, быжлап торған бал ҡойола башлаған... Беҙҙең һөйөклө һалдаттарыбыҙҙың сираттағы тапҡырлыҡы инде был... "Товарищ лейтенант, за слабую воспитательную работу среди личного состава подразделения - пять суток ареста!" тип аҡырҙы комдив, һәм уның беҙҙе тикшереүе шуның менән тамам булды. "Иптәш генерал, иртәгә Мәскәүгә уҡырға...", тип аңлатырға маташыуым бер ни ишетергә теләмәй китеп барған генерал артында һауала эленеп тороп ҡалды...

Һалдаттар боҙған эштә минең бер ғәйебем дә булмағанын аңларға ла теләмәгән был генералға, әлбиттә, ныҡ ҡына хәтерем ҡалды. Уҡыуға бер аҙ һуңлап барырға тура килде. Эйе, элек гауптвахтаға офицерҙарҙы ла ултыртыуы бик еңел ине шул. Ә хәҙер рядовой һалдатты ултыртыр өсөн дә прокурорҙың айырым ҡарары кәрәк...

Ике-өс аҙна самаһы үткәс, генерал менән тағы осрашырға тура килде. Мәскәүҙә. Үҙәк госпиталдә. Тап мин уҡыған хирургия бүлегендә. Кинәт кенә бөйөрҙәре үткәреүҙән туктаулы сәбәпле (блок почек) санитар авиацияһы самолеты менән ашығыс рәүештә килтергәндәр ине. Көн дә тиерлек инеп, хәлен белешеп йөрөнөм. Үҙ кешең бит, сүтәки...

### Ерҙең кендеге түгелһеңдер әле…

Һикһәненсе йылдар башы. Магазиндарҙа һөйләп килештергеһеҙ дефицит. Хәрби ҡаласыҡтарҙың военторг магазиндарында аҙыҡ-түлек һәм башҡа тауарҙар менән тәьмин итеү сағыштырмаса яҡшы ине. Ҡаласыҡта йәшәгән хәрбиҙәрҙе магазинға махсус пропуск менән генә үткәрәләр. Шулай бер көндө ҡатмарлы ғына операциянан һуң госпиталдән һәүетемсә генә арыған хәлдә өйгә ҡайтып киләм. Юл ыңғайында, бер аҙ аҙыҡ-түлек алырға тип, магазинға боролдом. Эй, әттәгенәһе, пропускым өйҙә икенсе кейемдең кеҫәһендә ятып ҡалған икән. Ярай әле, хәрби формаламын. Погондарҙағы медицина эмблемаһы ла таныулы. Үткәрерҙәр әле, тим. Тик ишек төбөндә торған патруль башлығы - интендант хеҙмәте капитаны ҡәтғи формала минән пропускымды күрһәтеүемде талап итте. Пропускымды өйҙә ҡалдырыуымды әйткәс, ҡайтып алып килергә ҡушты. Мин уға үҙемдең хәрби доктор икәнемде аңлатып, погондағы медицина эмблемаһын күрһәтәм. Капитан: "Вижу - не слепой",- тип һаман бирешергә теләмәй, "Табип булһаң ни, ерҙең кендеге түгелһеңдер әле", тип тә ысҡындырҙы был. Шулай итеп, мин ул көндә магазинға инә алманым. Артабан тартышып тороуҙы кәрәк тапмай, ҡайтып киттем.

Әммә бер-нисә көн үтеүгә ул капитан госпиталгә миңә приемға килеп инде. Әлбиттә, мине таныны. Уңайһыҙлана-уңайһыҙлана ғына үҙенең ҡайһы ере ауыртҡанын һөйләп бирҙе. Уның ысындан да бик уңайһыҙ ере ауырта ине. Бер урында оҙаҡ ултырыуҙан барлыҡҡа килә был сир. Ҡарап, тикшереп, һәр төрлө процедуралар яҙып биргәс, ҡыҙара-бүртенә минең кабинеттан сыға һалып китте һәм башҡаса күренмәне. Күрәһең, дауалау ысулы бик шифалы булғандыр...



***Пропускым өйҙә икенсе кейемдең кеҫәһендә ятып ҡалған икән. Ярай әле, хәрби формаламын. Погондарҙағы медицина эмблемаһы ла таныулы. Үткәрерҙәр әле, тим. Тик ишек төбөндә торған патруль башлығы - интендант хеҙмәте капитаны ҡәтғи формала минән пропускымды күрһәтеүемде талап итте. Мин уға үҙемдең хәрби доктор икәнемде аңлатып, погондағы медицина эмблемаһын күрһәтәм. Капитан: "Табип булһаң ни, ерҙең кендеге түгелһеңдер әле", тип тә ысҡындырҙы был. Шулай итеп, мин ул көндә магазинға инә алманым. Әммә бер-нисә көн үтеүгә ул капитан госпиталгә миңә приемға килеп инде. Әлбиттә, мине таныны. Уңайһыҙлана-уңайһыҙлана ғына үҙенең ҡайһы ере ауыртҡанын һөйләп бирҙе. Уның ысындан да бик уңайһыҙ ере ауырта ине. Бер урында оҙаҡ ултырыуҙан барлыҡҡа килә был сир. Ҡарап, тикшереп, һәр төрлө процедуралар яҙып биргәс, ҡыҙара-бүртенә минең кабинеттан сыға һалып китте һәм башҡаса күренмәне. Күрәһең, дауалау ысулы бик шифалы булғандыр...***

### Ничем не могу помочь...

Бер мәл, ҡаласыҡтан утыҙлаған саҡырымда ятҡан полктың хәрби медицина әҙерлеген тикшерергә барғанда, медпунктҡа бер һалдат мөрәжәғәт итте. Эс ауыртыуынан яфаланған һалдаттың һуҡыр эсәк өйәнәге башланған, һис кисекмәҫтән госпиталгә илтергә кәрәк. Һалдатты санитар машинаһына һалып алып киттек. Әммә юлдағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ постарҙың береһендә ВАИ (Воинская автоинспекция) патруле туҡтатты. ВАИ инспекторы - автомобиль хеҙмәте майоры беҙҙең водителдең

документтарын ентекләп тикшергәндән һуң, путевкала бер штамп етешмәгәнлеген асыҡланы. Һалдатты мөмкин тиклем тиҙерәк госпиталгә алып барып еткерергә кәрәклеген аңлатыуҙың файҙаһы әллә ни булманы. "Ничем не могу вам помочь, доктор. На путевке нет соответствующего штампа", тигән яуаптан башҡаны ишетеп булманы был "службист"тан. Ярай әле, рация аша хәбәр итеп, госпиталдең үҙ машинаһын саҡыртыуға ирештек...

Ә бер нисә көндән... Бына ниндәй әңгәмәнең шаһиты булдым. Хәрби санаторийға путевкалар яҙып биреүсе поликлиника начальнигының кабинетында ултырам. Путевка алырға тип бүлмәгә теге майор - автомобилист килеп инде. Поликлиника начальнигы тегенең документтарын тикшергәндән һуң: "Иптәш майор, һеҙ мотлаҡ рәүештә үтергә тейеш булған медкомиссияларығыҙҙы инде әллә нисә йыл үтмәгәнһегеҙ бит. Шуларҙы тулыһынса үтмәй тороп, мин һеҙҙе санаторийға ебәрә алмайым",- тине. "Касан комиссия үткәнсә, минең путевкам яна бит!" тип, үҙенекен аңлатырға маташа меҫкен майор. Әммә поликлиника начальнигы уға: "Ничем не могу помочь, товарищ майор", - тип яуап ҡайтарҙы...

## Көфөр булма...

Әлеге һикһәненсе йылдар. Ҡырға учениеларға тейәлеп сыға торған автомобилдең нимәһелер ватылды. Ә бер-ике көндән сираттағы учениелар башланырға тора. Автомобиль ремонтлау мастерскойына киттем. Ләкин машина йүнәтеүсе һөнәрмән прапорщик, эше күплеккә һылтанып, бер-ике аҙнаһыҙ эшләй алмаҫын әйтә. Шулай ҙа уның ваҡыты етерлек булыуын, әммә минән ниҙер там итеүен күҙҙәренән күреп аңлап алдым. Уның "төшөрөргә" яратыуын алдан ишетеп белһәм дә, бәлки, медицинаны хөрмәт итәлер, тигән өмөт менән "Һаулыҡ буйынса берәй проблемаң булһа - кил, сиратһыҙ хеҙмәтләндерербеҙ", тигән булам. Ул ошо йәшенә етеп (уға ҡырҡ йәштәр самаһы бар ине), бер ҡасан да табибтарға мөрәжәғәт итмәгәнен һәм тағы ла шул йылдар самаһы уларға яҡын да бармаясағын бик ышаныслы төҫ менән белгертте. Шулай итеп мин, башҡа офицерҙар һымаҡ уҡ, был Коноваловҡа бер "ярты" ҡуйырға мәжбүр булдым. Кискә ҡарай машинам сәғәт кеүек эшләй ине инде...

Ә төнөн, сәғәт ике-өстәр булғандыр, мине ашығыс рәүештә госпиталгә саҡырталар. Килдем. Ҡабул итеү бүлегендә муйынын бер аҙ алғараҡ һуҙа биреп, баяғы автомастер Коновалов ултыра. Ярым асыҡ ауыҙынан бер туҡтауһыҙ шайыҡ аға. Тамағына балыҡ һөйәге ҡаҙалған... Йотҡолоҡ буйындағы һөйәкте алып ташлағас, кү-ү-үп рәхмәттәр әйтеп сығып китте. Ошо хәлдән һуң уның менән башҡаса ҡыйынлыҡтар булманы. Һәр хәлдә, миңә әллә ҡайҙан сәләм биреп, "Какие проблемы, доктор?" тип кенә торор булды.

## Бирәм тигән ҡолона...

Ҡырҙағы учение ваҡытында яңылыш "МАЗ" машинаһының тәгәрмәсе аҫтында ҡалып, бер һалдаттың аяғы һынғайны (һыныу ғына түгел - бөтөнләйгә онталғайны). Травма шоғына ҡаршы тейешенсә уколдар яһағандан һуң, "УАЗ" санитар машинаһына һалып, ҡырҡ-илле саҡырымдар самаһында ятҡан госпиталгә алып киттем. Реанимация бүлегенә алып барыуҙы бер аҙ ғына кисектергән хәлдә лә һалдатҡа травма шогынан үлеү ҡурҡынысы янай. Ҡыш. Төнгө сәғәт ун ике-берҙәр тирәһе. Водитель рядовой Маматюк машинаның акселераторына бар көсөнә баҫа. Ярты юлда Покровка исемле бер генә ауыл бар. Шул ауылға килеп инеүебеҙ булды, машинабыҙҙың һыуы ҡайнап китте. Водитель машинаны туҡтатып, капотты асты ла, вентиляторҙың һәм помпаның билдеге өҙөлгәнен хәбәр итте. Ни эшләргә? Машина менән артабан барып булмай. Әммә һалдатты ҡотҡарырға кәрәк! Ул саҡта запчасть табыуҙары, ай-һай, ҡатмарлы ине шул. Айырыуса кес кенә ауылдарҙа. Ауыл йоҡлай. Үкенескә ҡаршы, ҡабаланып, үҙебеҙ менән рация ла алмағанбыҙ. Ул саҡта кеҫә телефоны хаҡында ишеткәнебеҙ ҙә юҡ. Укол тәьҫире бөтһә, һалдатты юғалттыҡ, тигән һүҙ... Йүгереп йөрөп бер нисә өйҙөң ҡапҡаһын шаҡыу ҙа файҙа бирмәне. Өмөтөбөҙ өҙөлөп тигәндәй юл уртаһында бер аҙ торғас, алыҫтараҡ, ай яҡтыһында бер кеше шәүләһе пәйҙә булды. Беҙгә етәрәк: "В чем проблема, ребята?"- тиеп өндәште. Бәләбеҙҙең ниҙә икәнен аңлатып биргәс, был әҙәм ауылда бындай машина булмауын, әммә уның мотоцикл һарайында тап УАЗ машинаһының беҙгә кәрәкле нәмәһе элеүле торғанын әйтте лә, өйөнә йүгереп инеп китте... Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәре тап ошо булғандыр инде. Белгән доғаларымды эстән уҡый-уҡый, Аллаһы Тәғәләгә зекер әйтә-әйтә, бер нисә минуттан артабан елә инек инде... Аллаһ сөбхәнә үә Тәғәлә ҡөҙрәте менән һалдатыбыҙҙы ҡотҡарып алып ҡалырға насип булды.

## Ауырыу юрау - килешкән эш түгел...

Беренсе синыфты тамамлар алдынан, ҡайҙалыр күргән ҡулы гипслы кешене эләкләп, бер ҡулыма еңемде кейҙермәйенсә, уны нәҡ гипстағы һымаҡ бинтҡа аҫып уйнап йөрөгәйнем. Бер-ике көн үттеме-юҡмы, дуҫым менән көрәшеп, тап ана шул ҡулымды һындырҙым. Унан инде, бер ай буйы ысын гипсҡа уралған ҡулымды муйыныма аҫып йөрөргә тура килде...

Һәм тағы... Туҡһанынсы йылдар башында Свердловск ҡалаһына округ госпиталенә камиллашыу курстарына барырға тура килде. "Ятаҡта йәшәгәнсе, үҙең уҡыған лор-бүлексәлә ят та ҡуй, үҙеңә ауырыу тарихы асайыҡ, шунда бер юлы уҡып та, эшләп тә йөрөрһөң", - тине бүлексә мөдире. Шунан ул минең ауырыу картама "һауанан" алып, бик һирәк кенә осрай, әммә дауалап булмай торған "Меньер ауырыуы" (бындай сирле кешенең йыш ҡына башы әйләнә, унан, әкренләп, йылдан-йыл һаңраулана бара) тигән диагнозды сәпәп ҡуйҙы. Барыһы ла яҡшы, бик тә уңай килеп сыҡты. Әммә... Бер-ике йылдан тап ана шул айырыуса һирәк осрай торған сир менән үҙем ысынлап та ауырый башланым һәм ошо көнгәсә яфаланам...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бындай хәлдәр, ысынлап та, һәр кем менән була торғандыр. "Донъя -ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа" ти был турала халыҡ мәҡәле. Тик бындай хәлдәрҙән ғибрәт алыуҙар уларҙы үҙе кисергән, һабаҡ алғандар ғәмәле. Үҙе кисермәйенсә, үҙ башынан үткәрмәйенсә һабаҡ алмай кеше тигәнең. Шул арҡала барлыҡҡа килә башҡаларға битарафлыҡ, игелекһеҙлек. Шуға ла балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә, ғөмүмән, һәр кемгә ошондайыраҡ миҫалдарҙы һөйләп, уларҙы уйландырайыҡ, йәмәғәт. Үҙегеҙ менән булған ғибрәтле хәлдәрҙе яҙып ебәрегеҙ беҙгә.**

*ШАҢДАУ*



# ЙӘНЛЕКТӘРҘӘ ЛӘ АҠЫЛ БАР

**"Киске Өфө"нөң 12-се һанында Заһир мырҙаның айыуҙар тураһында яҙғанын уҡығас, үҙемдең тыуған яҡ айыуҙары тураһында яҙмай түҙмәнем.**

Үрге Бикҡужа ҡара урмандар менән ҡапланған тауҙар урамаһында ултыра. Эргәлә генә Ағиҙел аға. Тарама ғына һаҙлыҡтарҙа бүре, ҡуян, төлкө мыжғыһа, ҡара урманда айыуҙар батшалыҡ итте. Беҙ үҫкәндә ҡырағай йәнлектәрҙең күплегенә әле лә ғәжәпләнәм. Шулай ҙа күп булһа ла, уларҙы тотоу саманан тыш булманы. Шәрәф ағай ҡышҡыһын бер генә айыу һуҡты, итен халыҡҡа таратты, тиреһен ҡайҙалыр тапшырҙы. Үлгәнсәгә тиклем Айыу Шәрәф булып йәшәне. Ә бүрегә фәҡәт Ғибәт бабай һунарланы: моронса кейҙереп, етәкләп ҡайтҡан сағы ла йыш булды. Бүрене үлтереп тунағанын бер кемгә лә, айырыуса бала-сағаға күрһәтмәне: йәнлектәргә ҡарата ҡаты бәғерлектән һаҡлағанын үҫкәс кенә аңланыҡ. Шуныһы: ул бүре тотҡандың төнөндә бүреләр 1-2 ауыл этен үлтерә ине. Үс алғандарҙыр, күрәһең. Иң күбе айыу булды. Ололар уларҙан һаҡланыу ҡағиҙәләрен тыҡып ҡына торҙо. Кешегә, малға тейгән осраҡтары беҙҙә булманы былай. Ауыл халҡы айыуҙарға мәрәкә итеп кенә ҡарай торғайны, ҡыҙыҡ мажаралары ла булды.

* * *

Бер йәйҙе атайым менән Зәки ағайым Иҙел үренәрәк ҙур мурҙа батырҙы. 1-2 көн батырҙылар - мурҙа ята, балыҡ юҡ. Өсөнсө көн аңдыһалар, ике "балалы" айыу урлай икән балыҡтарҙы. Ҡулы мурҙа ауыҙына һыймағас, ҡырсынға түгә лә ваҡтарын һыуға ырғыта, мурҙаны кире батыра икән был. Атайымдар көлә-көлә һөйләне. Башҡаса барманылар, әйҙә, ашаһын, тинеләр.

* * *

Иҙел буйында (5-6 саҡрым үрҙә) утын әҙерләйбеҙ. Төшкө аш мәлендә ҡаршы тауҙан бер айыу дөбөрҙәп төшөп беҙгә ҡарай йөҙөп килә башланы. Тиҙ генә йәшенештек. Усаҡ янына килеп ҡоланы был. Уның артынса һыуҙы шарлатып ҙур йылан сығып килгәнен шәйләнек. Ағайымдар күҫәкләшеп һыу ситенә баҫтылар ҙа йыландың башын туҡмап иҙҙеләр. Айыу шунан ҡасҡан, күрәһең. Беҙ йылан менән мәж килгән арала айыу, табаҡтағы итте лә әләктереп, шылған. Тамағы ла туйған, йыландан да ҡотолған айыу үҙенең тауына ҡарай йөҙә ине инде.

* * *

Мәрәүешле (ауыл исеме) һыртында колхозға бесән эшләп ятҡанда айыу менән сусҡаның "алышҡанын"да күрҙек. Айыу дөмбәҫләй, ә сусҡа тешләшә. Сусҡа еңелеп ҡасты.

* * *

Ҡалмаш кардонында айыу менән һыйырҙың һуғышыуын да көлөп һөйләнеләр. Һыйыр һөҙөргә уйлаған, ә айыу уның башын туҡмап үлтергән. Һыйыр үҙе ғәйепле, һөҙөшмәһен, тип көлдөләр.

* * *

Алексей бабайҙың умарталарынан берәмләп баллы рамдар юғала. Ул йәштәр сәлдерә, тип уйлаған. Бер төн ҡарауыллаһа, айыу ҡапҡасты асып, бер рамды ала ла кире яба икән. Төнөн ҡарттар сыҡмағанын айыу яҡшы белгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ололар тәбиғәтте файҙалана белергә, һаҡларға, үҙең дә абай булырға өйрәтте. Хәҙер йәнлектәр ҙә юҡ иҫәбендә: күренгән берен ҡыралар. Элек кеше аслыҡта ла йәнлекте аяған. Туҡлыҡтан ҡотorғандар хатта аҡҡоштарҙы ла ата, вертолеттар менән боландарҙы баҫтыра. Кешенең йыртҡыслығына йәнлектәр ҙә йыртҡыстарса яуап бирергә өйрәнә. Тәбиғәттән башҡа кешелек донъяһы һәләкәткә генә дусар булыуын бөтәбеҙ ҙә аңлаһаҡ ине лә бит.**

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# САМАЛАП АЛДАШ...

**Һорау: Ни өсөн был донъяла бөтөнләй алдашмайынса йәшәп булмай?**

Бик ҡыҙыҡ һорау, шул уҡ ваҡытта ауыр ҙа... Алдашмайынса мөмкин булмаған иң ауыр ситуацияла иң дөрөҫө - ауыҙыңды йом да, кешене генә тыңлап тик ултыр ҙа ҡуй. Шулай ҙа, намыҫыңа тап төшөрөп, ирлегеңә ниндәйҙер кимәлдә хыянат итеп алдарға ярамай. Сөнки был алдау үкенесле тамамлана. Аҙағы үҙеңде лә үкендерерлек, алданыусы кешенең яҙмышын насар яҡҡа үҙгәртерлек, йә уның күңелен китерлек булып тамамлана икән, алдарға ярамайҙыр, тип уйлайым.

Әгәр ҙә инде яҡын кешеңдең күңелен аяу, һаҡлау маҡсатында дөрөҫөн әйтеү һис кенә лә мөмкин түгел икән, ул сағында алдарға булалыр. Шулай уҡ һинең алдауың кешегә ваҡытлыса ғына булһа ла дауа килтерә, уның да, һинең дә принциптарыңа хыянат итеү, уларҙы емереү түгел икән - ул саҡта ла алдашыу яҙыҡ булмаҫтыр.

Әсә кешене генә алайыҡ: балаһының эшкинмәгән икәнен күреп тора, эш боҙғаны өсөн уны сыбыҡ менән яра, үҙе: "Ҡәһәр һуҡмағыры", - тип әрләй. Миҫалдан күренеүенсә, әсә балаһы өсөн ысынлап та көйә, әммә уға яуызлыҡ теләмәй - юрамал ғына әрләй, икенсе төрлө әйткәндә, алдай. Бында әсәнең әр һүҙе лә тәрбиәләнеүсенең зиһененә, күңеленә файҙаға ғына йүнәлтелгән. Педагогикала тәрбиәләнеүсенең күңелен үҫтереү өсөн "еңелсә алдау" юлы менән уны ҡупайтып ебәреү ҙә алдауға иҫәпләнмәйҙер. Сөнки уның маҡсаты - күңелде үҫтереү.

Эйе, барыбер ҙә тормошта бөтөнләй ҙә алдашмай булмай. Тик алдашыуың гонаһҡа батырмаһын, яуызлыҡ килтермәһен, шуныһы мөһим.

**Тимер НИӘТШИН,**
**шағир.**

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

220
Кәңәшем һеҙгә:
Һуҡмағыҙ йөҙгә.

221
Иң хаҡ һүҙҙе шағир Ләбиб
Шулай тип ярып һалған:
"Тик Аллаһ хаҡ! Ҡалғандары
Ялған, барыһы ялған!"

222
Холҡоғоҙҙо насар яҡҡа
Бора торған ҡомһоҙлоҡтан,
Ояһын зауыҡ юҡ ергә
Ҡора торған ҡомһоҙлоҡтан
Тыйылығыҙ, тыйылығыҙ,
Тик Аллаһҡа һыйынығыҙ.

223
Яҡты донъяларҙан һис тә
Төңөлә күрмә, ваз кисмә.

224
Ҡатынға ҡол булған ирҙән
Меҫкенерәк кем бар ерҙә?

225
Һаҡланһаң да һин бик нығ,
Яҙмышыңдан уҙмыш юҡ.

226
Килер шундай бер заман:
Дин тотоуҙа сабырҙар
Ҡулдарына утлы күмер
Тотҡан килеш ҡалырҙар.

227
Ни һөйөклө һинең үҙ күңелеңә,
Һөйөклө ит шуны йорт-илеңә.

228
Етемдәргә ҡайҙа хөрмәт тейер,
Шундай йортто Аллаһ үҙе һөйөр.

229
Саҙаҡаңды башта үҙеңә бир,
Шунан - ғаиләң, бала-сағаларға.
Ғаиләңдән артһа - туғандарға,
Туғандарҙан артһа - башҡаларға.

230
Дуҫыңды шашып яратма!
Берәй көн ошо дошмаңдың
Дуҫ булып китеүе бар.

231
Һин ҡыйырһытҡан йән
Кафыр булғанда ла,
Доғаһынан һаҡлан -
Пәрҙә юҡ доғаға.

232
Береһе икенсеһен үлтерергә
Ҡылыс тотһа ике мосолман,
Үлтергәненә лә, үлгәнгә лә
Йәһәннәмдән юҡтыр ҡотолмаҡ.

233
Нәҫел-шәжәрәне онотмағыҙ,
Ҡәрҙәштәргә йышыраҡ барығыҙ,
Хәлен белеп, күҙенә ҡарағыҙ.

Йөрөшкәндә туған алыҫ түгел,
Алыҫ булғанда ла арағыҙ.
Йөрөшмәгән туған яҡын түгел,
Яҡын булғанда ла арағыҙ.

234
Енәйәт эш йәшеренә икән,
Гонаһ енәйәтсегә ни бары.
Беленеп тә, гонаһ язаһыҙ ҡалһа,
Бар халыҡҡа тейер зарары.

235
Изгелегенә һөйөнһәң,
Яманлығына көйөнһәң,
Тимәк, һин - ысын мөьминһең.

**(Дауамы бар).**




- Ярай, апай, концертҡа мотлаҡ килерһегеҙ, йәме...

Ул тағы ла бер тапҡыр нурлы йылмайыуын бүләк итте лә сығып китте. Йөрәк рәхәт сымырҙап ҡалды. Әллә ниндәй кеше шул ул Дарман. Йондоҙмон, тип маһаймай, йылмайыуын әһәмиәтһеҙ бер нәмә ише генә тирә-яҡҡа сәсә. Ә шул нурҙар гәжәп бер көскә эйә: хәүеф тарала, йонсоу көн дә яҡтырып китә. Ул бөйөк эштәр өсөн тыуған Ижад кешеһе. Кеше ваҡлыҡтары ят уға. Эскерһеҙ күңеленең шар асыҡ булыуын күреп, әсе-леһыуыҡлы булып китәм. Яңылышмаһа ярар ине, берәй ҡарәсле бәндәһе асыҡ күңеленә ласлатҡансы төкөрөп китмәһә ярар ине, тим. Аҙмы ни шундай әҙәмдәр?

Бәй-бәй, ни күрәм? Әле генә минең менән хушлашып сыҡҡан Дарман урамда яп-ят бер ҡыҙҙы ҡосаҡлап тора. Һүҙ ыңғайында ғына ҡыҙҙың битенән дә үбеп алды, шунан, ғәҙәтенсә, йүгерә-атлай машинаһына ыңғайланы. Күргәнемдән һушымды йыя алмай торғансы, теге үбелеүсе Зилә аҡ монарҙарын эйәртеп, кабинетыма килеп тә инде. Йылмайыуынан, күҙҙәрендәге осҡондарҙан бүлмә яҡтырып китте.

- Хәйерле көн, Һылыубикә апай, хәлдәр нисек?

Алдымдағы ихласлыҡтың сағыу бер өлгөһөнә ҡарап, тағы баҙап ҡалдым. Әллә ниҙәр уйлап бөттөм шул арала. Етмәһә, инеүсене: "Һин - ир ҡатыны, ни йөҙөң менән ул ҡатынлы ирҙең ауыҙына инерҙәй булып хаяһыҙ ҡыланаһың", - тип орошмаҡсы булып торам. Бәлки, улар туғандыр, йә... Эштең айышына төшөнмәйенсә, нишләп хыянатта ғәйепләмәк булам әле уны? Зиләне күптән беләм, тиһәм дә, уның ғаиләле, балалы икәненән артыҡ бер һүҙ ҙә әйтә алмайым. Бик аҡыллы ҡатын икәнлеген дә шәйләгәйнем. Ниндәй тема ҡуҙғатһың да, һәр саҡ үҙ фекере була, һәр хәл-ваҡиға хаҡында хәбәрҙар. Үҙемдең коллективҡа эшкә алырға ла уйлап йөрөй инем, кире ҡаҡты.

-Мин ҡаланы яратам, рәхәтләнеп йәшәп китер инем, кеше тупһаһында йөрөһәм дә ауырһынмаҫ инем, бәлки... Әммә иремде атаһы нигеҙенән ҡуҙғатып алып китеп тә, ул бында урынлаша алмаһа? Мин унан күберәк аҡса алып, карьера эшләй башлаһам, уны шуның менән кәмһетермен тип тә ҡурҡам. Һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ҡына торам.

Эй, апай! Үҙ холҡомдо үҙем белмәйемме ни мин? Көсһөҙ бит мин, аңлайһыңмы, көсһөҙ! Аҡса, дан кеүек башҡа ҡапыл ғына килеп төшкәндә күтәрә алмайым. Танау күтәрелә башлай, ҡайҙа башлайым. Холҡом боҙола. Иремде үҙем үк кәмһетә башлаясаҡмын. Кешелеккә - ниндәйҙер бер абстракт нәмәгә хеҙмәт иткәнсе, бер кешене - иремде бәхетле итеү Хаҡ тәғәлә ҡаршыһында дөрөҫөрәк булмаҫмы?.. - тигәйне Зилә.

Уның был һүҙҙәре оҙаҡ ваҡытҡа уйға һалды мине. Ниндәйҙер дәрәжәлә хаҡлыҡ уның яғында ла һымаҡ ул. Беҙҙең халыҡта әҙме ни шундай ҡатын-ҡыҙҙар - аҡыллы ла, сибәр ҙә, булдыҡлы ла. Теләһә ниндәй вазифалы эшкә ҡуй - емертеп эшләй, ил, халыҡ өсөн йәнен фиҙа ҡыла. Әле бынау бала, минән ике тапҡыр әҙерәк йәшәгән булһа ла, нимә ти? "Һеҙ, ирҙәр беҙҙең өсөн, тип яңылышаһығыҙ, асылында иһә, Хоҙай беҙҙе улар өсөн яратҡан бит. Тимәк, беҙ үҙебеҙ үҙгәрергә, кәрәк икән шәхси амбицияларҙы ҡуйып торорға тейешбеҙ", ти.

- Ә Хоҙай һиңә талант биргән икән, һин уны халыҡҡа ҡайтарырға тейеш түгелме ни? Талантлы булыу - яуаплылыҡ бит ул. Хоҙай биргән осҡондо ваҡ-төйәк мәшәҡәт саңына күмеү - оторо гонаһ түгелме?

- Эй, апай, кем белә һуң - нимә ул талант? Минең һәләтем - Хоҙайҙан, тип өҙөп әйтә алыр инегеҙме һеҙ? Әллә уны халыҡҡа ҡайтарһын тип биргән Хоҙай, әллә ни бары һынамаҡ өсөн генә...

...Мин уларҙы таныштырҙыр тип башыма ла килтермәгәйнем. Зилә баш ҡалаға ярты йылға бер генә килеп сыға, унда ла көнөнә әйләнеп ҡайтып китә. Тегеһе сит илдәрҙә гастролдәрҙән ҡайтып инмәй, районларға сыҡҡаны ла юҡ. Ә бер-береһен бик яҡшы белгән кеүек торалар ине тороуон... Был ҡыҙыҡһыныу күңелгә тынғы бирмәҫ, ахыры. Арлы-бирле хәл-әхүәл белешеп, йомошон тамамлағас, баянан бирле күңелде ҡытыҡлап торған һорауҙы бирмәй түҙмәнем:

- Таныш икәнегеҙҙе белмәй инем, нимә серләштегеҙ ул Дарман менән?

- Ниндәй Дарман? Ә-ә-ә, Дарман Бәхетбирҙинды әйтәһеңме? - шарҡылдап көлөп ебәрҙе Зилә. - Нимә тиһен инде ир-егет йәш һәм әллә ни йәмһеҙ булмаған ҡатын-ҡыҙға? Билдәле инде, осрашайыҡ кискә, тине.

Минең ҡояш ярсығына, Хоҙай бәндәһенә тиңләп һоҡланған шәхесте Зиләнең шулай яп-ябай ғына һәр бер итәк артынан эйәреүсегә тиңләгәндәй ҡәҙимгә генә әйтеп ҡуйыуы сикһеҙ асыуыма тейҙе.

- Ә һин нимә тинең?

- Ә мин, көсһөҙ ҡатын-ҡыҙ, нимә тип яуап бирә алам әле апаруҡ йәп-йәш һәм Иблистең үҙе кеүек сибәр һәм ымһындырғыс ир-егеткә? Әлбиттә, "эйе", тинем.

- Эйе, тинеңме?

- Эйе, тинем. Ул бит меңәрләгән ҡатын-ҡыҙҙың хыялы, идеалы, кемдер уға ҡағылыу түгел, тере килеш йөҙөн күрергә зар-интизар. Ә миңә иһә - тиктомалдан ысынбарлыҡ.

- Иренә хыянат булмаймы ни был?

- Ниндәй хыянат, һеҙ нимә? Хыянат ул тиңдәр араһында була! Ә был хыянат түгел, был - награда! Ниндәй ир-егет ҡараны бит миңә, кемде ҡыҙыҡтырҙым бит, тип түшкә миҙал итеп тағырлыҡ был фактты хатта...

Әллә ысынды һөйләй, әллә юрый ҡылана был нишана. Иренә мөхәббәт хаҡына карьеранан да баш тартҡан кешенән көтмәгәйнем мин бындай һүҙҙәрҙе лә, бындай ҡылыҡты ла. Әллә, ысынлап та, шулай уйлай, әллә берәй хәйләһе бар. Ә әңгәмәсем күҙгә һаман тишә ҡарап дауам итте:

- Ә ниңә, һеҙ баш тартыр инегеҙме минең урында? Ул кем дә, мин - кем? Ул - йондоҙ. Ысынлап та йыһандан тамған тамсы. Электр шәме яҡтыһы түгел, ҡояш нуры. Ә мин? Мин уның менән сағыштырғанда саң, туҙан, ничто! Һуш алырлыҡ сибәрлегем дә юҡ, аҡылым да том-том китап яҙырлыҡ түгел. Уға берәй файҙам тейерлек вазифа ла биләмәйем, исмаһам. Ә ул мине таный. Нисә йылдар үткән, ә ул исемемде онотмаған, гәжәп бит! Шуны аңлауҙан минең дә күңелем үҫеп китте хатта. Һеҙҙең ҡояш нурында уйнаған саңды күргәнегеҙ бармы? Һәр бөртөгө алтын булып йым-йым ялтырай, эйеме? Ә шул уҡ ваҡытта ул бит туҙан, саң булыуҙан туҡтамай. Ни бары саң, ә ҡояш нуры уны нисек үҙгәртә, ниндәй матурлыҡ өҫтәй, зиннәткә әйләндерә! Шул уҡ ваҡытта ҡояштың яҡтыһы ла кәмемәй, нуры ла тоноҡланмай, бер ниндәй ҙә саң ҡунып ҡаплай алмай уны. Ул көслөрәк барыһынан да. Уның саҡ ҡына иғтибары тарафыма йүнәлгәйне, мин дә әллә кем булып үҫеп киттем, үҙемде мөһим кеше итеп тоям. Иң гәжәбе - үҙем өсөн мөһим кешемен, үҙемдә яҡшыраҡ баһалайым, үҙаңым күтәрелә. Аҡылым менән, әлбиттә, бик яҡшы аңлайым - ул минән бик йыраҡ. Ул - юғарыла, ул башкөллө ижад тигән серле донъяла. Мин уның өсөн бөтөнләй әһәмиәтле кеше түгелмен. Мин булмаһам, бөгөнгә тиклем икенсе берәйһе өлөшөнә төшәр ине...

Хыянат тиңдәр араһында ғына була. Гәжәп һүҙҙәр. Ҡайҙан алып әйтте Зилә быны? Берәй ерҙән уҡығанмы, берәйһе тормош тәжрибәһенән сығып әйткәнме? Әммә уның ауыҙынан был һүҙҙәр шул тиклем тәбиғи килеп сыҡты, әйтерһең, был хаҡта ул бик оҙаҡ уйланған, күп кисергән, күп күргән һәм оло тормош юлы үтеп, ошо фекергә килгән. Ҡасандыр, алыҫ йәшлектә иремдең хыянаты хаҡында белеп, яралы инә арыҫлан шикелле бәргеләнеп аҡылдан яҙырҙай булып өҙгөләнгән саҡта күпте күргән бер апай шундайыраҡ һүҙҙәр менән тынысландырырға, аңыма ҡайтарырға тырышҡайны мине.

- Һин аҡыллы, сибәр, тәүфиҡлы, булдыҡлы ҡатын-ҡыҙ. Баһаңды белмәгән, аңламаған икән, һин түгел, кейәү терһәген тешләрҙәй булып үкенһен. Һиңә тиң була алмағаны өсөн талағы ташып йөрөй бит уның. Аҙғынлыҡтан түгел, көсһөҙлөктән. Һиңә тиң була алмау көсһөҙлөгөнән! Һеҙҙең никахты беләһеңме нимә менән сағыштырыр инем мин? Һин көнө-төнө ғаиләгә ризыҡ хәстәрләп, ҡара тиреңде түгеп хеҙмәт итеүсе ат, ә ул һинең елкәлә ҡаныңды имеп ятыусы күгәүен. Күгәүендең икенсе атҡа йәбешеп сығып китеүенә ҡайғырырмы аҡылы булған бәндә, ә? Тәүҙәге атына хыянат булырмы был ҡылыҡ, уйлап ҡара әле юрамал ғына. Шулай шул, бер нисек тә хыянат булмай, сөнки күгәүен һәм ат - ул төрлөһө төрлө дәүмәл. Улар араһында мөхәббәт һәм хыянат кеүек төшөнсәләр ҙә була алмай. Сөнки улар тәбиғәттән тиң түгелдәр! Ул һиңә тиң түгел ине, башың йырылыуы ошо булһын, илаһым!

Аҙаҡ мин үҙем дә "башым йырылыуына" шат булдым. Шул хәл булмаһа, баш ҡалаға күсеүҙе, бәлки, ғүмер буйы кисектерә килеп, әлеге бейеклеккә күтәрелә алмаған да булыр инем. Ысынлап, апайым мине атҡа тиңләп хаҡлы булған: һырт буйына ҡамсы әләккәнгәнгә тиклем алдымдағы кәртәне ырғып сыға алмай тик торған булғанмын икән.

...Зилә минән кәңәш-фәләнме, орошоу көтөпмө, һаман күҙемә текләп көтөп тора. Ә мин тап ошо минутта уға бер ни ҙә әйтергә хоҡуғым юҡлығын тойҙом. Ул бер кем кәңәшенә лә мохтаж түгел. Уңға бороламы, һулғамы - ул тик үҙе генә хәл итергә тейеш. Күктәр тарафынан ниндәйҙер шауҡым ҡағылғандыр уға. Югиһә, нисек аңлатырға һуң

ауыҙынан сыҡҡан төптө сәйер, йәш кешегә хас булмаған, аксиома дәрәжәһенә өлгәреп еткән уй-фекерҙәрҙе, тормошҡа ҡарата булған күҙәтеүҙәрҙе? Ул быға тиклем дә теге йәки был кешегә тәү ҡараштан биргән үлтергес ҡылыҡһырламаһы менән һушымды китәрә торғайны. Мин күп осраҡта уның менән килешә торғайным, сөнки беҙҙең ҡараштар тап килә ине. Әммә мин үҙ фекеремә кешене йылдар буйы өйрәнеп, күҙәтеп, ҡылған ҡылыҡтарына ҡарап, тормош тәжрибәһе аша килгән булһам, ул - керпеген һирпеп бер ҡараш ташлауы менән... Мейене ялтлап үткән был уй үҙемә лә асыш булды.

Зилә "алтын саң бөртөгө" Дарман биргән саҡырыу билетын әйләндереп-әйләндереп ҡарап, бер талай һүҙһеҙ торғас, минән яуап ала алмаҫын аңлап, һаубуллашты.

* * *

Булһа була икән шул тиклем дә моң кешелә. Һәр бер күҙәнәккә тиклем ошо илерткес бер тойғоға бирелеп шаңҡыны. Илаһи бер ҡөҙрәт бар булмышыңа тулып, ташып, күҙ йәштәре сүрәтендә атылып сыҡты. Йәше-ҡарты, төрлө милләт кешеләре лә берҙәй минең һымаҡ йәшкә төйөлгән. Ә сәхнәләге Дарман Бәхетбирҙин, нисә йөҙ кешене фарманһыҙ-бығауһыҙ үҙ ихтыярына буйһондорған да үҙе генә гиҙеп йөрөгән моң дарьяһынан, моң диңгеҙенән һәр берегенә йотом уртлата... Кешеме һин, илаһи затмы? Илаһи зат икәнһең, нишләп был гонаһлы ерҙә йөрөйһөң? Рәхмәт һиңә, Дарман!

Моңға иҫереп ултыра торғас, бер нисә кеше ашаһындағы бер ҡатынға күҙем төшөп, ҡапыл айныным. Ул аҡҡош муйынын һуҙып, сәхнә яғына уҡталған да керпек тә ҡаҡмай ҡатҡан. Таныным. Дармандың ҡатыны, балаларының әсәһе. Һәләтле балерина ине, иренең баш әйләндергес карьераһы хаҡына үҙенекенән баш тартты. Дарман кеүек кеше хаҡына шулай итмәй ҙә булмайҙыр. Әммә эстән бындай ҡорбан менән килешмәйем дә, сөнки үҙем бер ҡасан да ир күләгәһендә тороп ҡалырға риза була алмаҫ инем. Нисек инде, һин уның көнкүрешен тулыһынса үҙ өҫтөңә һал, иң матур, йәш ғүмереңде уны хеҙмәтләндереүгә, тормош ваҡ-төйәктәренә бағышлап үткәр... Ә ул ир тигәндәре урам буйында икенсе берәүҙе ҡосаҡлап үпһен, ул ғына ла етмәгән, киске осрашыуға саҡырһын...

Дарманды ғәҙәти кешеләрҙән етешһеҙлектәренән азат итеп күргем килә ине шул. Гонаһлы ер йөҙөндә бер идеаль шәхес була алғанына ышанғы килә. Моңо менән шундай юғары хистәр тойорға мәжбүр итеүсенең түбән тойғоларға бирелә алыуын аҡылым аңлаһа ла, күңелем ҡабул итмәй. Дарман ир-егет түгел, ә - талант! Уның моңо ғына түгел, бер йылмайыуы ла йәнде дауаларға һәләтле. Аҙаҡ, концерттан һуң, Дармандың дәү фотоһүрәтен кабинетыма көҙгө эргәһенә элеп ҡуймай түҙмәнем. Үҙемде үсмер ҡыҙыҡайҙар ғына мауыҡҡан шөғөлгә бирелеп китеүемә эстән әрләнһәм дә, өҫ-башымды төҙәткән булып көҙгө янында өйөрөлгәндә, фотоға ҡарап-ҡарап алам. Барыбер күңел күтәрелеп китә...

Буранлы ҡыш та үтте. Инде муйыл сәскәләре лә хуш еҫен аңҡытыуҙан туҡтаны. Күңел инде "оҙаҡламай йәйге отпуск", тип талпына ла башланы. Саң-туҙан борҡоуо ғына теңкәгә тейә. Хәйер, яратҡан һәр нәмәнең ен һөймәгән икенсе яғы булалыр инде. "Саң" тип кенә ҡояш тулы йәйҙән мәңге баш тартмаҫ инем мин!

Шундай йәмле көндәрҙең береһендә ипле генә ишек шаҡыныլар. Таныйым мин был шаҡыуҙы. Уның үҙенә күрә бер көйө лә бар.

- Нисек хәлдәр, Һылыубикә апай? - Зилә, ғәҙәтенсә, ихлас йылмая, көҙгөгә лә күҙ ташларға өлгөрә. Ҡарашының Дарман портретында туҡталып ҡалыуын күреп, тертләп китәм.

- Матур фото. Миндәгеһе бәләкәйерәк. Уның ҡарауы - автографлы!

Әрнеү-һағыш ноталары тойолмаған ғәмһеҙ тауыш яңғырауы, ни ғәжәп, миңә тынысландырғыс тәьҫир итте.

- Ә ниңә, автограф ҡынамы ни? Ә матур хәтирәләр?

Әңгәмәсем һүҙҙәремә көлөп кенә ҡуйҙы. "Һөйләргәме-юҡмы?" тип икеләнеп ултырҙы, буғай.

- Көсһөҙ кеше мин шулай ҙа...

Унан инде нисәнсе ҡат был һүҙҙәрҙе ишетеүемә аптырап, ҡараштарымды күтәрҙем.

- Барҙым мин теге юлы осрашыуға. Шул ресторанды эстән күргем килә ине, әҙерләгән ризыҡтары күңелемә ятманы. Әллә шуға ҡапыл икеләнә башланым. Әгәр, мәйтәм, ошо аҙымға барһам, аҙағынан мине нимә көтә, тип уйға ҡалдым. Иремдең ихлас, ышаныусан ҡарашы күҙемә төбәлгән һайын, выждан ғазабы кисерәсәкмен бит, тигән фекер мейемде быраулай. Ғүмер буйы сер йәшерергә, ике йөҙлө кеше булып йәшәргә көсөм етерме һуң, тинем үҙемә. Һәм шуны аңланым - көсөм етмәйәсәк. Артыҡ турамын, ҡалайта беләһең. Ваҡ-төйәктә генә алдашһам да үҙемде шул тиклем насар тоям, әйтерһең дә, башымдан уҡ бысраҡ һыу менән ҡойонғанмын. Ә хыянаттан һуң үҙеңде бигерәк күрә алмаҫҡа кәрәктер ул?.. Юҡ, бындай хистәрҙе әлегә минең кисереп ҡарағым килмәй. Автограф алдым да, төнгө поезға билет алғанмын бит әлеү, тип, йөҙөмә ҡаты борсолоу ғәләмәттәре сығарҙым да ... ҡайттым да киттем...

- Һин үҙеңде саң бөртөгөнә, ә уны ҡояшҡа тиңләй инең түгелме ни? Хыянат бит тиңдәр араһында ғына була!

Минең үҙ һүҙҙәре менән төрттөрөүемә Зилә ирендәрен бөрөштөрөп көләмһерәп кенә ҡуйҙы.

- Байҙар һәм ярлылар, вазифалылар һәм эшһеҙҙәр, кәрәклеләр һәм кәрәкһеҙҙәр, сирлеләр һәм һауҙарға бүленгән был гонаһлы ерҙә генә беҙ Дарман менән үҙара тиң түгел. Ә Хоҙай ҡаршыһында был төшөнсәләрҙең бер мәғәнәһе лә юҡ. Уның алдында - ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ. Ни бары шулай ғына...

Зиләнең һүҙҙәренә бер нимә тип тә яуап ҡайтара алманым. Дөрөҫөрәге, хәҡиҡәтте аңлауымдан телһеҙ ҡалғайным...

**Рәйлә САБИТОВА.**

О, СПОРТ!

# КАМИЛЛЫҠҠА ТАБАН...

## нисә көн барырға?



**Ауыл ситендә йәйелеп ятҡан баҫыу юлы буйлап бер малай йүгереп килә. Малдарын иртән көтөүгә ҡыуған ауыл ҡатындары менән итәғәтле генә иҫәнләшеп үтә ул. Сабир ағай Яҡуповтың 15 йәшлек улы Марселдең иртә таңдан тороп баҫыу-ҡырҙарҙы урап йүгереүенә ауылда барыһы ла өйрәнеп бөткән инде. Бәләкәй генә сағынан йүгереү менән ҡыҙыҡһыуына егет үҙе атаһына рәхмәтле. Килешәһегеҙҙер, атай кеше улына ниндәй генә һөнәр өйрәтмәһен - файҙаға. Малайҙар, ғәҙәттә, аталары өйрәткән һөнәрҙе үҙләштерә һалып ала, улар белгәнде белгеһе килә, һәр яҡлап тик уларға ғына оҡшарға тырыша.**

Йүгереүҙең кеше организмына ыңғай тәьҫир итеүсе ғәмәл булыуын бик борондан уҡ белгәндәр. Ғалимдар йүгерек организмындағы гипофиз тигән биҙҙең эндофрин гормонын мулыраҡ бүлеп сығарыуға булышлыҡ итеүен асыҡлаған. Был гормон кешенең кәйефен күтәрә, бәхет хисен барлыҡҡа килтерә. Шулай булғас, йүгереп тә бәхет хисен булдырып була икәнен үҙегеҙ ҙә тикшереп ҡарарға мөмкин. "Бәхетле булыу мөһим түгел, ә үҙеңде бәхетле итеп тойоу мөһим", - тиҙәр тағы ла. Боронғо Элладала барлыҡҡа килгән: "Көслө булғың килһә - йүгер! Матур булғың килһә - йүгер! Аҡыллы булғың килһә - йүгер!" тигән һүҙҙәр менән дә килешмәү мөмкин түгел. Йүгереү ярҙамында ирешелә торған физик көс менән сағыштырғанда, ихтыяр көсө кемгәлер ҡәҙерлерәктер ҙә, бәлки. Әбйәлил районы Таштимер ауылынан килеп, 7-се синыфтан баш ҡаланың иҡтисад лицей-интернатында белем алыуы, ата-әсәһен һағыныуын еңә алмайынса, кире ҡайтып китмәүе - уның да ихтыярының көслө булыуы хаҡында һөйләй.

Лицей-интернатҡа уҡырға ингәс тә бокс секцияһына яҙыла Марсель. Сөнки йәнетәне менән спортҡа ынтыла, һәүетемсә генә уҡыу тәртибен хушһынмай. Уҡыуының икенсе йылында лицей-интернатта ушу түңәрәге асылыуы тураһында ишетә. Әйткәндәй, тренер Тимур Кәримов тураһында алдағы һандарҙың береһендә яҙғайныҡ инде. Тәрбиәләнеүселәренең физик торошон да, рухи торошон да күҙ уңынан ысҡындырмаған, уҡыуҙары менән дә даими ҡыҙыҡһынып барған тренерҙың дәрестәренә Марсель дә бик теләп йөрөй башлай. Тренерҙары ҡайһы бер көндәрҙә ушуның тарихын һөйләй, Көнсығыш философияһы серҙәренә төшөнөргә ярҙам итә.

Ҡыҙыҡлы тарихҡа беҙ ҙә күҙ һалайыҡ. Әле яҙыу ҙа, ҡоралдар ҙа барлыҡҡа килмәҫ элек уҡ ҡытайҙар үҙҙәренең ихтыярын, физик торошон эш һәм һуғыш алымдары ярҙамында сыныҡтырыуға ынтыла. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, меңәр йыл элек Ҡытайҙа Ся, Шан, Джоу династиялары хакимлыҡ иткән дәүерҙә был һуғыш төрө барлыҡҡа килә. "Һуғыш һөнәре" тип тәржемә ителә икән ул. Тандар хакимлыҡ иткән осорҙа йәшәгән бөйөк Ҡытай шағиры Ду Фу һуғышсының йөҙрөгөн - сәскә менән, ә аяҡтарын - сигеү өсөн тәғәйенләнгән энәләр менән образлы сағыштырған. Ысынлап та, ушу - бейеү сәнғәтенә оҡшаш: унда иҫ киткес матурлыҡ та, теүәллек тә, ритмика ла бар. Был мәктәптә үткән балаларҙың хәрәкәт координацияһы өсөн яуап биргән вестибуляр аппараты бик үҫешкән була. Теүәллек талап иткән хәрәкәттәр ярҙамында оҫталар дошманға бер тапҡыр ғына ҡағылып еңә ала, тигән мифик ҡараш та ҡасандыр барлыҡҡа килгән. Элекке һуғыш ысулы бөгөнгө көндә тулыһынса спорт төрө булараҡ ҡына, "йомшартылған" килеш өйрәтелә.

Марсель ярыштарҙа башлыса ушуның саньда төрө буйынса сығыш яһай. Ушуның төп һәм иң ябай алымдарынан барлыҡҡа килгән саньда (йәки "саньшоу") ҡул, аяҡ менән һуғышыуҙы ла, көрәш элементтарын да үҙ эсенә ала. Әле 9-сы синыфта белем алыусы егет ушу-саньда буйынса 3 тапҡыр Өфө ҡалаһы, 4 тапҡыр республика чемпионы титулдарын яулаған. Күптән түгел Өфөлә Рәсәйҙең Урал-Волга буйы төбәктәре араһында үткәрелгән ҙур ярышта ҡатнашып, 3-сө урынға лайыҡ булды. Үҙенең еңеүҙәре тураһында әллә ни һөйләргә яратмай Марсель: "Спорттың был төрөндә еңеүсе булһам да, үҙемде башҡаларҙан юғары тоторға яратмайым - барыһына ла тиң ҡарайым, үҙем булып ҡалырға тырышам", - ти ул. Уның уҡыуҙа яҡшы өлгәшеүендә, спортта алдынғылыҡты бирмәүендә, итәғәтле, тәртипле булыуында тәбиғәттән бирелгән һәләте лә, ата-әсә тәрбиәһе лә, шул иҫәптән тренерының йоғонтоһо ла һиҙелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ушу һуғыш сәнғәтеме? Спортмы? Әллә һауығыу күнекмәләреме? Беҙҙеңсә, иң тәүҙә - шәхестең камиллыҡҡа табан барыу юлы ул. Ошо урында бер хикәйәт хәтергә төшә. Камиллыҡҡа табан барыусыларға төбәлгән уның мәғәнәһе. Ҡалаға китеп барған бер юлсы аҡыл эйәһенә тап була. "Оҙаҡ барырғамы әле?" - тип һорай ул аҡыл эйәһенән. "Атла", - ти ҡарт һаран ғына. Теге кеше аҡһаҡалға үпкәләп, артабан китә һәм бер аҙ барғас, ҡарттың тауышы арттан йәнә ишетелә: "Һиңә тағы бер көн барырға тура килер". "Ниңә мин һорағанда уҡ яуап бирмәнең?"- тигән һорауына аҡыл эйәһе тыныс ҡына: "Миңә һинең аҙымдарыңды күрергә кәрәк ине", - ти. Билдәле, юлды ниндәй етеҙлектә үтеү - юлсының хәрәкәт итеү тиҙлегенә туранан-тура бәйле. Ә бала сағынан йүгерергә ғәҙәтләнгән, өҫтәүенә, шәхес камиллығына әйҙәгән спорт төрө менән ныҡлап шөғөлләнгән Марселгә аҡһаҡал нимә тип яуап бирер ине икән?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ШИҒЫР ЯҘЫУСЫЛАР... бәхетлерәк

■ Биттә һәм муйында йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүе һәр осраҡта ла тирене дөрөҫ тәрбиәләмәү тураһында һөйләмәй. Йыйырсыҡтар һөйәк туҡымаһына бәйле проблемаларҙы ла белдереүе ихтимал, тип белдерә Америка ғалимдары. Махсус приборҙар ярҙамында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кешенең ауырлығына, йәшенә, көүҙә төҙөлөшөнә ҡарамай, йыйырсыҡтар күберәк һәм тәрәнерәк булған һайын, һөйәктәр йомшағыраҡ һәм һыныусаныраҡ була.

■ Калифорния ғалимдары белдереүенсә, шиғыр һәм йыр яҙыу кеше һаулығы өсөн үтә файҙалы шөғөл. Баҡтиһәң, шиғыр яҙыу һәләте кешене күп кенә фобияларҙан һәм социаль ҡурҡыуҙарҙан ҡотҡара икән. Шиғыр, йыр йәки проза яҙған ваҡытта баш мейеһенең эмоциональ тоторotҡһоҙлоҡ өсөн яуап биреүсе өлөшө насарыраҡ эшләй, ә үҙ-үҙеңде контролдә тотоуға булышлыҡ итеүсе өлөшө, киреһенсә, әүҙемләшә. Хәҙер ғалимдар был мәғлүмәттәргә таянып, фобияларҙы дауалау, стрестан, ҡурҡыу, һағыш тойғоларынан ҡотолорға ярҙам итеүсе махсус терапия уйлап сығарыу өҫтөндә эшләй.

■ Иртәнсәк һәр етенсе ҡатын-ҡыҙ ғына яҡшы кәйефтә уяна, ҡалғандарының кәйефе бөтөнләй булмай, тип белдерә Британия ғалимдары. Ә ир-егеттәрҙең 40 проценты уянғанда күтәренке кәйефтә була икән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың төндә насар йоҡлауының, шуның һөҙөмтәһе булараҡ, иртәнге насар кәйефтең төп сәбәбе булып эштәге стресс тора. Бынан тыш, ҡатын-ҡыҙға эшкә сығып китер алдынан ғаиләһенә ашарға бешерергә, үҙен һәм балаларҙы тәртипкә килтерергә кәрәк. Ә ираттар, ғәҙәттә, уянғандан һуң өйҙә ун минут тирәһе генә була. Шуға ла ҡатын-ҡыҙға күп эштәрҙе кистән эшләп ятыу яҡшыраҡ, тип кәңәш итә ғалимдар.

■ Күп тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һыйыр һөтө ябыҡтырыу һәләтенә эйә. Әммә Италияның Неаполь университеты ғалимдары һыйыр һөтөнән дә файҙалыраҡ һөт төрөн асыҡлаған. Баҡтиһәң, ишәк һөтө тиҙерәк ябыҡтыра ла, организм өсөн файҙалыраҡ та. Ишәк һөтөндә май күләме аҙыраҡ, тик ул туҡлыҡлыраҡ. Уның составындағы омега 3 һәм 6 майлы кислоталары ҡандағы холестерин күләмен түбәнәйтә, тимәк, йөрәкте һәм ҡан тамырҙарын төрлө ауырыуҙарҙан һаҡлай. Составында кальций күп булған ишәк һөтө күкрәк һөтөнә лә оҡшаш, шуға уны һыйыр һөтөнә аллергия булған балаларға ла бирергә ярай, ти белгестәр.

■ АҠШ ғалимдары асыҡлауынса, тән температураһы ғүмер оҙайлығын да билдәләй ала. Организмда барған гормональ үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә кеше гел өшөй, әммә был һаулыҡ өсөн файҙалы икән. Вашингтон университеты белгестәре иҫбатлауынса, гел өшөп йөрөүсе кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, оҙағыраҡ йәшәй.

■ Оксфорд университеты ғалимдары бик ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Баланың буйына уның тулы ғаиләлә үҫеүе йәки үҫмәүе йоғонто яһай икән. Әгәр ҙә бала 15 йәшкә тиклем әсәйһеҙ тәрбиәләнһә, ул әсәйле балаларҙан ике сантиметрға бәләкәйерәк була. Шулай уҡ ғаиләнең матди килеме лә баланың буйында сағыла, имеш, ата-әсәнең килеме ни тиклем яҡшыраҡ, балалар оҙонораҡ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Бөгөн организмды "шлак" һәм "токсин"дар таҙартыу - бик модалы шөғөл, ахырыһы. Был турала телевизорҙан да һөйләйҙәр, сәләмәтлек тураһындағы журналдарҙа яҙалар, тик организмға ниндәйҙер матдәләрҙе сығарырға ярҙам итергә кәрәкме һуң? Был һорауға аныҡ ҡына яуапты хатта белгестәр ҙә бирә алмай. Ҡайһы бер табиптар фекеренсә, беҙҙең организмыбыҙ бик камил, үҙен-үҙе яйлай алған система һәм матдәләр алмашыныу продукттары тәбиғи рәүештә сығарыла. Тик быны өсөн кеше һау-сәләмәт булырға тейеш. Тирә-яҡ мөхит, йәшәү рәүешебеҙ организмдың тәбиғи фильтрҙарының эшен арттыра ғына. Шуға ла ҡайһы бер белгестәр организмға ярҙам кәрәк, тип иҫәпләй.**

# ТӘНДЕ ТАҘАРТЫУ ТЕЛӘГЕ...



## йәнде таҙартыу кәрәклеге тураһында һөйләй

### Нимә ул "шлак"?

Был серле шлактар тураһында популяр әҙәбиәттә күп яҙылһа ла, ғилми әҙәбиәттә улар тураһында мәғлүмәт бөтөнләй юҡ тиерлек. Таҙалыҡ "яратыусылар" әйтеүенсә, таш, лайла, ауыр металдар тоҙҙары организмда яйлап йыйыла. Һәм, был ни тиклем сәйер яңғырамаһын, организм уларҙан үҙ аллы ҡотола алмай икән, шуға ла клизмалар, диеталар кәрәк, имеш. Әммә медицинала "шлак" тигән термин юҡ. Сеченев исемендәге Мәскәү медицина академияһының гастроэнтерология клиникаһы профессоры Семен Рапопорт әйтеүенсә, "таҙартыу" тигән төшөнсә кеше организмына ҡарата ҡулланыла алмай. "Сөнки кеше - йорт түгел, унда бысраҡ йыйылмай" . Ошоға тиклем УЗИ, гастро- һәм колоноскопия бер кемдә лә шлак тапҡаны юҡ.

Улай булғас, ниңә унан ҡотолоу идеяһы шул тиклем популяр һуң? "Шлак, токсин, паразиттар - уйлап сығарылған әйберҙәр, - ти диетолог Михаил Гинзбург. - Быға ышаныусылар кеше "бысраҡ" мөхиттә йәшәй һәм был мөхит төрлө насар ауырыуҙар булдыра, тип иҫәпләй. Улар был ауырыуҙарҙан ҡотолоу юлын организмды таҙартыуҙа күрә".

### Диета ла хәүефле

"Токсин" тигән термин табиптарға нығыраҡ оҡшай. Әммә тиҙ арыуҙан башлап ашҡаҙан, артыҡ ауырлыҡҡа тиклем булған бөтә проблемаларҙы токсиндарға япһарырға ярамай.

Токсин, тимәк, ағыу. Әммә ул беҙҙең организмға нисек килеп эләгә һуң? Фитотерапевт Елена Корсун әйтеүенсә, мәҫәлән, әгәр ҙә ҡандың биохимик анализында ниндәйҙер фермент кимәле артҡан икән, уны ла токсин тип иҫәпләргә мөмкин. Матдәләр алышыныуының бындай продукттары ысынлап та зарарлы булыуы ихтимал, ҡайһы бер осраҡтарҙа улар бөйөргә, үт ҡыуығына таш булып ултыра. Ә табиптар нимә кәңәш итә һуң? Иң тәүҙә, кәрәсин эсеү, клизма ҡуйыу кеүек ысулдарҙан һаҡланырға кәрәк. "Бындай матдәләрҙе организмдан сығарыуҙың уникаль ысулы юҡ, быны бары тик асығып ҡына эшләргә була, - ти Елена Корсун. Әммә был бик ҡурҡыныс ысул. Асығыуҙы табип күҙәтеүе аҫтында ғына башҡарырға кәрәк. Етмәһә, асығыусы кешенең сәләмәт булыуы шарт". Иң дөрөҫө - анализдар тапшырыу һәм табип менән бергә мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләү.

Организмды таҙартыуға ҡарағанда, уны "бысратмау" күпкә хәйерлерәк. Иң тәүҙә туҡланыуға иғтибар бирергә кәрәк. Фастфуд, консерванттар, татлы аҙыҡтар зыянлы икәнен барыһы ла белә. Шулай уҡ күп итеп ит ашау һөҙөмтәһендә аш һеңдереү системаһына һәм бөйөрҙәргә артыҡ көс төшә. Бөгөн модалы булған аҡһым диетаһы ла бөйөргә насар тәьҫир итә. Шуға ла бер көнлөк асығыуҙар ойоштороу күпкә яҡшыраҡ.

### Мунсаға йөрөгөҙ

Дөрөҫ туҡланыу менән бер рәттән, SPA- процедураларға йөрөгөҙ. Бигерәк тә диңгеҙ ылымыҡтары, балсыҡ файҙалы. Улар сорбент ролен үтәп, организмға кәрәкмәгән матдәләрҙе тире аша тышҡа сығарырға ярҙам итә. Шулай уҡ мунсаны ла онотмағыҙ. Кеше ни тиклем йышыраҡ тирләй, шул тиклем артыҡ матдәләр күберәк сығасаҡ. Мунса тотош организм өсөн дә файҙалы, унда йөрәк тибеше йышая, ҡан әйләнеше яҡшыра. Шуның өсөн дә ул йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусыларға тыйыла.

**ӘЙТКӘНДӘЙ....**

**Психологтар белдереүенсә, тәнен "таҙартыу" менән шөғөлләнеүселәр ысынында психологик проблемаларын хәл итә. Баҡтиһәң, ниндәйҙер шлактарҙан таҙарынып, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән кире тойғоларҙан һәм уйҙарҙан ҡотолорға теләйбеҙ икән.**

БЫЛАР ФАЙҘАЛЫ

# КОМПЬЮТЕР КҮҘҘЕ БОҘА

**Күптәрегеҙгә, моғайын, үҙенең эше буйынса кәрәкле мәғлүмәт эҙләп, көнө буйы компьютер экранына текәлеп ултырырға тура киләлер. Шундай көсөргәнешле эштән һуң беҙҙең заманға хас булған профессиональ күҙ ауырыу барлыҡҡа килеүе мөмкин.**

Һуңғы йылдарҙа күп ваҡытын компьютер артында уҙғарырға мәжбүр булғандар өсөн күҙ проблемаһы бик киҫкен тора. Эш шунда, компьютерҙа эшләгән ваҡытта күҙҙәрҙе һирәк йоморға тура килә, ә был күҙ ҡабағында ҡоролоҡ барлыҡҡа килеүгә һәм күҙҙәрҙең әсетеп ауыртыуына алып килә. Бынан башҡа компьютер ҡарашыбыҙҙы бер фокусҡа тупларға мәжбүр итә, һөҙөмтәлә баш ауырыуҙары, баш әйләнеүе, күҙҙәр томаланыуы барлыҡҡа килә.

Күҙҙәрҙең көсөргәнешенән күҙ менән компьютер экраны араһында дөрөҫ аралыҡ урынлаштырып ҡотолорға мөмкин. Бынан башҡа тағы ла бер нисә ысул бар.

● Үҙегеҙгә иң ҡулайлы арауыҡты һайлағыҙ. Күҙҙән алып компьютер экранына тиклем ара һәр кешенең индивидуаль: кемгәлер 40 см тулыһынса етә, ә кемгәлер 60 см ҙа әҙ була. Төрлө арауыҡтарҙан үҙегеҙҙе һынап ҡарағыҙ: экрандағы һүрәтте асыҡ күрер өсөн муйынға көс төшөргә тейеш түгел.

● Бүлмә яҡтылығы. Бүлмәлә яҡтылыҡты тулыһынса һүндереп, һеҙ күҙҙәрегеҙгә өҫтәмә көсөргәнеш булдырасаҡһығыҙ. Экранда нур шәлкемдәре барлыҡҡа килеүҙән ҡасыр өсөн шәм яҡтыһын бер аҙ кәметеү яҡшыраҡ.

● 30-30 ҡағиҙәһен тотоғоҙ. Күҙҙәрҙә ҡоролоҡ барлыҡҡа килмәһен өсөн компьютер артында 30 минут эшләгәндән һуң 30 секундҡа туҡтап тороғоҙ. Был ваҡытта шундай күнекмәләр эшләгеҙ: башығыҙҙы тура тотоп, күҙҙәрегеҙҙе бүлмә буйлап бер нисә секунд буйы әйрәлтеп алығыҙ. Һуңынан ҡарашығыҙҙы бер нөктәлә туҡтатып, башығыҙҙы әйрәлтегеҙ. Һәм ҡарашығыҙҙы мөмкин булған тиклем алыҫҡа коридорға йәки тәҙрә аша йүнәлтегеҙ - күҙҙәрегеҙгә ял бирегеҙ.

● Һауа дымлылығын арттырығыҙ. Бының өсөн бүлмәгә һауа дымландырғыс йәки ҙур үҫемлек ҡуйығыҙ. Был күҙҙәрҙә ҡоролоҡ барлыҡҡа килеүҙән ҡасырға ярҙам итер.

● 5-6 стакан һыу эсегеҙ. Был һеҙҙең күҙҙәрегеҙгә өҫтәмә дым бирергә ярҙам итер.

● Компьютер экранындағы һәр төрлө нур шәлкемдәрен юҡ итегеҙ. Экрандың торошон йәки бүлмәләге яҡтылыҡты үҙгәртегеҙ, йә булмаһа тәҙрә шаршауҙарын тартығыҙ, йәки компьютер экранына махсус яҡтылыҡ фильтры ҡуйығыҙ.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФЕКЕР ЙӨРӨТӨП...

## Аллаһы Тәғәләне таныйыҡ



**Беҙ күп кешеләрҙең аралашҡан ваҡытта йыш ҡына Аллаһы Тәғәләне иҫкә төшөргәнен ишетәбеҙ: "Аллаһ Тәғәлә һеҙгә рәхмәтле булһын", "Аллаһ ҡабул итһен", "Аллаһ риза булһын", "Аллаһ теләһә" һ.б. Был нәҡ Аллаһы Тәғәләне иҫкә төшөрөр, уға доға әйтер, уны бөйөкләр өсөн әйтелгән һүҙҙәр.**

Мәҫәлән, "Аллаһ һиңә ярҙам итһен" һүҙҙәре тик Аллаһы Тәғәләнең генә бөтәһе менән дә - бөтә барлыҡ һәм тереклек менән дә идара иткәнлеген аңлата. Тик Аллаһы Тәғәлә генә һине, әсәйеңде, атайыңды, ғаиләңде яуызлыҡтан ҡотҡара алыр. Бер минут ҡына уйланып алығыҙ әле: кемдер һине тәбиғәттең ҡотороуынан, мәҫәлән, һыу баҫыуынан ҡотҡара аламы? Әлбиттә, юҡ! Был бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә ихтыярында.

"Иншаллаһ" - әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә теләһә, тигәнде аңлата. Тик Аллаһ ҡына беҙҙең киләсәгебеҙҙе белә һәм ул ғына беҙҙең аҙымыбыҙҙы, ғәмәлдәребеҙҙе йүнәлтә ала. Ул теләмәһә, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Әгәр ҙә кемебеҙҙер иртәгә нимә эшләйәсәге тураһында үҙ-үҙенә ышанып һүҙ әйтә икән, шул кеше ныҡлы хаталана. Беҙ Аллаһы Тәғәлә уға иртәгәлеккә нимә әҙерләгәнен белмәйбеҙ. Бәлки, ул ауырыр ҙа, ниәтләгән эшен эшләй алмаҫ. Шуға күрә беҙ киләсәк хаҡында һөйләгәндә иртәгә нимә булыры хаҡында алдан белмәгәнгә "Иншаллаһ" тип әйтәбеҙ.

"Берәй эш башлар алдынан һис бер ваҡытта ла: "Мин быны иртәгә һис шикһеҙ эшләйәсәкмен", тип әйтмә. Иншаллаһ, Аллаһ теләһә, тип әйт башта. Онотоп ебәрәһең икән, Раббыңды иҫеңә төшөр ҙә: "Өмөт итәм, Раббым был мәсьәләне асыҡлар өсөн мине тура юлға йүнәлтер", - тип әйт" (18:23, 24).

Тирә-йүнегеҙгә ҡарағыҙ ҙа фекер йөрөтөгөҙ. Мәҫәлән, күбәләктәрҙең ҡанаттарындағы мөғжизәле төҫтәр, икһеҙ-сикһеҙ йәйрәп ятҡан диңгеҙҙәр, йәшел урмандар, далалағы миллиардлаған ҡом бөртөктәре тураһында уйланығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһы Тәғәлә яралтҡан. Аллаһ бөтә йыһанды юҡтан бар иткән. Әгәр ҙә һеҙ уның ижадының матурлығын күҙәтһәгеҙ, уның икһеҙ-сикһеҙ рәхмәтен дә күрерһегеҙ.

Беҙ барбыҙ икән, һис шикһеҙ, Аллаһ та бар. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, беҙ кем һәм беҙҙе Аллаһы Тәғәлә ниндәй камиллыҡ менән яралтҡаны тураһында йышыраҡ уйланайыҡ.

НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## ерҙәге ожмах сағылышы ул



### Балаларҙа иман тәрбиәләү

**Бөгөнгө көндә беҙҙең балаларыбыҙҙы ниндәй хәүефтәр һағалай? Күңелһеҙлектәрҙән ҡасыр өсөн ата-әсәләргә нимәләрҙе белеү мөһим?**

Бөгөн беҙҙең балаларыбыҙҙы эҙәрлекләгән иң ҙур хәүеф - рухи тәрбиәнең етмәүе. Белем кимәле артҡан һайын дини һәм рухи нигеҙҙәр тейелмәйсә ҡала. Мәңгелек донъяның матурлығы тураһында бер нәмә лә белмәгән кеше, хатта белеме тураһында бер нисә дипломы булһа ла, тыныслыҡ таба алмаҫ. Йәмғиәттә бындай рухи боҙолоуҙарға миҫалдар күп, шуларҙың береһе наркобәйлелек. Күпме ҡыҙ бала наркотик селтәрҙәренә эләгеп, үҙенең бөйөк тәғәйенләнеше тураһында онота һәм минутлыҡ ҡәнәғәтлек өсөн үҙенең ғиффәтлеген ҡорбан итә. Был, моғайын, беҙҙең балаларға янаған афәткә сағыу миҫалдыр. Ә ошоно булдырмаҫ өсөн балала кесе йәштән үк ныҡлы иман һәм юғары әхлаҡ тәрбиәләргә кәрәк. Илаһи фатиха менән яҡтыртылмаған йәндәр нисек бәхетле була алһын?

Дин күҙлегенән ҡарағанда, белемһеҙлек - беҙҙең иң ҡурҡыныс етешһеҙлегебеҙ, кешенең йәшерен дошманы. Аллаһы Тәғәләнең фатихаһынан мәхрүм булған наҙан кешеләр тик үҙ файҙаһы тураһында ғына уйлай. Дини тәрбиә етмәүе кешегә матди бәйлелек алып килә һәм иман кәмеүенең сәбәпсеһе булып тора. Матди бәйлелек - ул ҙур бәхетһеҙлек, хатта ауырыу тип әйтергә лә була. Рухи ҡиммәттәрҙе иҫәпкә алмау йәмғиәтте "тере мәйет"кә әйләндерә.

Аллаһы Тәғәлә ебәрелгән ниғмәттәре тураһында беҙгә былай тип хәбәр итә: "Мәрхәмәт эйәһе Аллаһ Ҡөрьәнде өйрәтте, инсанды яралтты, һөйләшергә өйрәтте. Теүәл үлсәү менән Аллаһ Күкте бейек итеп яһаны. Һаҡ булығыҙ, ғәмәлдәге үлсәмде боҙмағыҙ" (әр-Рахман", 1-4, 7).

Ер һәм күк үлсәмдәре менән ҡоралланған Илаһ Йыһан ҡанундары, шулай уҡ Изге Ҡөрьән тәғлимәттәре аша беҙгә үлемдең теге яғында ла айырым тәртиптәр барлығын хәбәр итә. Фани донъяла ла, мәңгелек донъяла ла күп төрлө үлсәүҙәр бар, шуларҙың иң дөрөҫө булып ғүмер һәм үлем һанала. Бөтә үлсәүҙәргә тура килер өсөн киләһе быуынға бөтә яҡтан да өлгө булырға кәрәк. Ҡөрьәндә әйтелгән: "Кем туҙан бөртөгө ҡәҙәре генә изгелек ҡылған булһа, хатта шул да күренер. Кем туҙан бөртөгө ҡәҙәре әшәкелек ҡылған булһа, ул да күренер" ("әз-Зилзәлә", 7-8).

Бер һүҙ менән әйткәндә, балаларҙы улар үҙҙәренең яҡшы һәм лайыҡлы эштәре менән Йыһандың тигеҙлеген һәм бәйләнешен һаҡларлыҡ итеп тәрбиәләргә кәрәк. Һис шикһеҙ, ата-әсәнең аҡылы һәм тәрбиәһе лә бында ҙур роль уйнай.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Алда көткән байлыҡ формалары

Бынан алда яҙған һуңғы аффирмация универсаль һәм һәр кемгә лә файҙалы. Булдырыуҙа ҡатнашыусы ролен башҡарыу - байлыҡҡа эйә булыуҙың дөйөм бүлеүсеһе. Байлыҡ һеҙгә төрлө формаларҙа килеүе мөмкин.

Джон Хирес көйәрмән була. Ул үҙ ҡалаһында булған бейсбол матчтарын ҡарап ҡына ҡалмай, икенсе ҡалаларға ла йөрөй. Ул брокер контораһында эшләй. Сираттағы тапҡыр етәксеһенә инеп, бер туғанын ерләргә ҡайтырға кәрәклеген белдергәс, начальнигы башын ғына сайҡап ҡуя - хәлен уртаҡлашыуҙан түгел, ә уны бары тик шундай тиҙлек менән туғандарын ерләгән Джон аптырата. Эшенә килгәндә инде, был өлкәлә Джон һәм уның клиенттары торғонлоҡ кисерә. Ваҡыт ваҡыты менән етәксеһе уға идеялар бирә, Интернеттың яңы ҡаҙаныштары менән танышырға йәки аэрокосмик компаниялар менән эш башларға тәҡдим итә. Джон был тәҡдимдәрҙе ҡыуанып ҡаршы ала, әммә һуңынан барыбер бөтөн иғтибарын командаларҙың юғары лигала нисек урынлашыуына йүнәлтә.

Сираттағы тапҡыр "туғанын ерләргә" ҡайтырға булғас, етәксеһе Джонға психотерапевтҡа күренергә ҡуша. Психотерапевт гипноз менән дауалай һәм Джонға бейсболға ҡаршы, уның урынын алырҙай икенсе төрлө ыңғай көйләү бирә. Шуларҙың береһе "Һин эшеңдән ҡәнәғәтлек алаһың, тәжрибәңде, белемеңде һәм интуицияңды үҙеңә һәм башҡаларға файҙа килтереүгә йүнәлтә башлайһың" тигән көйләү була. Джон эшенә күберәк иғтибар бүлә башлай, шуның менән бергә уның средстволарҙы инвестициялауҙың ижади ысулдарына иғтибары арта. Ул һәм уның клиенттары ғәмәлдә байый, ғаиләләге мөнәсәбәттәре йылына.

Ваҡыты еткәс, байлыҡ беҙгә төрлө формаларҙа килә. Һеҙҙең ваҡытығыҙ еткән. Ижадсы һеҙгә ҙур кредит бирергә әҙер. Бен Франклиндың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ: "Олоғая барған һайын мин был хәҡиҡәттең инандырырлыҡ дәлилдәрен күрҙем. Аллаһы Тәғәлә ысынлап та кешеләрҙең ғәмәлдәре менән идара итә, әгәр уның теләгенән башҡа хатта турғай ҙа ергә төшмәй икән, уның ҡатнашлығынан тыш тотош империяның сәскә атыуы мөмкинме?".

**Аҡса килеүҙе нисек көсәйтергә?**

Ижади өндәге төш һәр саҡ емешле. Хәҙер һеҙгә, аҡсағыҙ бар һәм һеҙ улар ярҙамында хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашыраһығыҙ, тип күҙаллау файҙаға буласаҡ.

● Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм үҙегеҙҙе ғәҙәттә финанс эштәре менән булған урынығыҙҙа (өйҙә йәки эштә) тип күҙаллағыҙ.

● Банкка иғәнә индерергә әҙерләнәһегеҙ тип уйлағыҙ. Һеҙ дәртле һәм көс-ҡеүәтегеҙ ташып тора. Бер нисә секундҡа ошо тойғоларҙа туҡталып, уларҙы тойоғоҙ.

● Уйҙан ғына: "Мин Илаһты миңә байлыҡ биреүе өсөн яратам һәм Булдырыуҙың ҡатнашыусыһы ролен намыҫ менән башҡарам", - тиегеҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Был күрһәтмәне бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм һуңғы аффирмацияны яҡшы итеп хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 27 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 8-я серия. Мелодрама
22.30 "Наследник любой ценой". "Суррогатное материнство"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Борджиа", 4-я серия. Сериал
00.55 "Дневник 33-го Московского Международного кинофестиваля"
01.00 "Убийство школьного президента"
02.45, 03.05 "Кошки-мышки"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Алтайский самородок. Панкратов-Черный"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 82-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 110-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 187-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Бежать", 9-я и 10-я серии
22.50 "Тайны следствия", 4-я, закл. серия
23.50 "Вести+"
00.10 "От Помпеи до Исландии. Кто следующий?" Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Иллюминация". Драма
04.05 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "До суда"
03.45 "Следствие вели..."

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 "Антракт". Р. Хайруллин**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Городок АЮЯ"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Студенчество - прекрасная пора". Концерт"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00, 23.30 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Весело живем"**
**16.30 Концерт группы "Аргымак"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30, 22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "И тогда придут другие…"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**

## 28 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
